✓ *Бер уҡыусы остазынан һорай икән: "Остазым, донъя ҡайғы-хәсрәт менән тулған. Әйт әле, ошондай заманда кеше ни менән йыуанырға, ҡайғы-хәсрәттән нисек арынырға тейеш?" "Ниндәй кеше тураһында әйтеүеңә ҡарап, яуап бирәм, - тигән остаз. - Аҡыллы кеше "Яҙмышыма яҙылған икән, был ҡайғы-хәсрәткә мин тарырға тейеш булғанмын", тип йыуана. Ахмаҡ иһә, "Быndай ҡайғы-хәсрәт мине урап үтәсәк, миңә ҡағылмаясаҡ", тигән уйҙан йыуаныс таба.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№27 (601)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Ҡағыҙәләр һанға һуғылмай...



3

Башҡортостандың бер ҡанаты - Азияла, икенсе ҡанаты Европала ҡағына бит...



8-9

Салауат, тип йырҙар башлайым да,

Салауат, тип сығам көрәшкә!



11

Параллель донъя...

уйҙырма түгел



12

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### БР Дәүләт Йыйылышы - Королтай депутаттары тарафынан халыҡ һорауы буйынса республикала спиртлы эсемлектәр етештереү эшен көйләү тураһындағы законға үҙгәрештәр индерелә, ул урындарҙа араҡы һатыуҙы сикләү, кәрәк икән - тыйыу мөмкинлеген күҙҙә тота. Бындай ҡарарға мөнәсәбәтегеҙ нисек?

***Мәүзиҙә БАЙМӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы:*** Бындай ҡарарға ҡуш ҡуллап ҡушылам, хуплайым, күптән кәрәк ине. Тамам ялҡытты бит был эскелек. Иманым камил, ауыл халҡы ла шулай тип әйтәсәк, сөнки күпселек ана шул эскелек афәтенән яфа күрә: кәмеһенең ире, кәмеһенең улы эсә. Ул ғына ла түгел, ҡайһы бер ғаиләләрҙә әсә кешенең эскелеккә бирелеүе бигерәк аяныслы фажиғәгә әйләнде. Әгәр был закон ҡабул ителеп, үҙ көсөнә инһә, ауылдаштар менән йыйылыш үткәреп, берәй ҡарарға килергә тура килер. Ләкин мәсьәләнең икенсе яғы ла бар бит әле. Магазинда араҡы һатылмаһа, көмөшкәселәргә форсат тыуасаҡ. Улар былай ҙа эскеселәргә тәьмин итеп тороусы төп "сауҙа" нөктәләре бит инде. Алкоголиктар фәҡәт ана шул көмөшкәселәргә йөрөй: берҙән, унда аҡсаң булмаһа ла ҡуйыныңа бер ярты килеп инә, сөнки бурысҡа йә булмаһа шешәһен ҡайҙандыр сәлдерелгән берәй әйбергә алмаштырырға ла тартынып тормай оятын юғалтҡан көмөшкәсе. Шуға ла әлеге закон менән бергә мотлаҡ самогон ҡойоуҙы ла тыя торған закон ҡабул ителергә тейеш! Араҡыны магазиндан алыусы ла юҡ инде ул пенсионер һәм башҡа шундай бер аҙ ғына аҡсалы кешеләрҙән башҡа. Әлеге әйтмешләй, тәүлектең теләһә ниндәй сәғәтендә көмөшкәсе йортона юлды тапаусы күп. Ауылдаштарын күрәләтә һәләкәткә, енәйәткә этәреп, уларҙы туктауһыҙ ағыулаусы көмөшкәселәр, үкенескә, беҙҙә лә бар. Улар менән һөйләшеүҙең әллә ни файҙаһы юҡ, шуның өсөн уларҙың "эшмәкәрлеген" тыйыусы ҡәтғи закон кәрәк. Хәтерләһәгеҙ, заманында СССРҙың тәүге һәм һуңғы президенты Михаил Горбачевты "коро" закон өсөн нисек кенә һүкмәнеләр! Ә бит барыбер тап шул йылдарҙа эскелек менән бәйле енәйәт, тәртип боҙоуҙар бик нык кәмеп ҡалғайны. Тимәк, был өлкәлә йомшаҡлыҡ күрһәтергә, ярты-йорто саралар менән сикләнергә түгел, ә ҡәтғи закон ҡулланып, тыйыу ғына кәрәк. Артабан күҙ күрер.

***Марат ИШМӨХӘМӘТОВ, халыҡ табибы, яҙыусы, сәләмәт тормош рәүешен пропагандалаусы:*** Гиппократтың, битарафлыҡ һәм бер гәмәл дә ҡылмау ахыр сиктә физик һәм рухи боҙоҡлоҡҡа килтерә, тигән һүҙҙәре бар. Оҙаҡ, бик оҙаҡ килешеп йәшәлде боҙоҡлоҡ менән. Эскелек - ул иң яман боҙоҡлоҡ. Артабан да уның йәнәшәһендә килешеп йә битараф йәшәү енәйәткә бәрәбәр. Эскелеккә ҡаршы кисектергеһеҙ саралар күреүҙе һорап, БР Дәүләт Йыйылышы депутаттарына мөрәжәғәт итеүселәр араһында унлап кеше ҡул ҡуйған беҙҙең хатыбыҙ ҙа бар. Ниһайәт, халыҡ тауышы юғарыға барып етеме икән ни? Бик хуп! Югиһә, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: эскелек арҡаһында күпләп халыҡ ҡырыла, ә хоҡуҡ һаҡлау органдары - ләм-мим. Был күренешкә дәй мөнәсәбәте лә юҡ. Улай булмай бит, ил өҫтөнә ябырылған бәләгә ҡаршы бергәләп көрәшеү фарыз. Спиртлы эсемлектәр етештереү эшен көйләү хаҡындағы законға араҡы һатыуҙы сикләү тураһында өҫтәмәләр индереү бик дөрөҫ, тип уйлайым, ләкин беҙҙә закон ҡабул ителә лә уның нисек эшләүе күп ваҡыт күҙәтелмәй. Мәҫәлән, күптән түгел шулай уҡ балиғ булмаған йәштәгеләргә алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тыйыу тураһында ла закон ҡабул ителгәйне, хәтерегеҙҙәме? Ә беҙ ни күрәбеҙ? Йәй еткәйне, бөтә үҫмер, бала-сағаның һәм, әлбиттә, йәш кенә һылыуҡайҙарҙың ҡулдарында - һыра шешәһе. Берәй сауҙа нөктәһенә ингәндә күргәнегеҙ бармы һеҙҙең һыра һатып алыусының йәше менән ҡыҙыҡһынған һатыусыны? Йәки ишеткәнегеҙ бармы берәй һатыусының балиғ булмағандарға спиртлы эсемлек һатҡаны өсөн административ язаға тарттырылғанын? Закондар ҡабул ителә ул, тик был ғына етмәй әле, уның эшләүен, һөҙөмтәлелеген дә тәьмин итергә кәрәк. Ауылдарҙа рәхәтләнеп көмөшкә етештереп, бер ниндәй сикләүһеҙ һатып ятыусыларға ҡарата ла тыйыу булырға тейеш, шунһыҙ, эскелеккә ҡаршы көрәштең һөҙөмтәһе булмаясаҡ.


(Дауамы 2-се биттә).


## ШИҒРИ ҺҮҘ

### УРАЛ БАТЫРҘЫҢ ӘЙТКӘНЕ:

*Улдарым, тыңлаң, һеҙгә әйтәм,*
*Бигерәк, илем, һиңә әйтәм:*
*Батыр, батыр булһаң да,*
*Батыр беләкле тыуһаң да,*
*Илдә йөрөп, ил күрмәй,*
*Тубығыңдан ҡан кисмәй,*
*Йөрәгең батыр булалмаҫ.*
*Яуыҙға юлдаш булмағыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.*
*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*
*Мин әрсегән еремдә*
*Кешегә байман табығыҙ:*
*Яуҙа булһа, баш булып,*
*Кешегә ил ҡороғоҙ,*
*Данлы батыр булығыҙ.*
*Олоно оло тейегеҙ,*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ;*
*Кесене кесе тейегеҙ,*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ.*
*Күҙеңә сүп төшөрҙәй,*
*Күҙһеҙ булып ҡалырҙай*
*Еҫерҙәрҙең алдында*
*Күҙеңә керпек булығыҙ...*
*... Барығыҙға шуны әйтәм:*
*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*




"Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең XVI республика конкурсы еңеүсеһе - Салауат районы Әлкә урта мәктәбе уҡыусыһы Илнар Зарипов. (Конкурс тураһындағы материалды 5-се биттә уҡығыҙ).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ФЕКЕРЕ ТОС, ҠӘЛӘМЕ ҮТКЕР

**Ғүмерем буйы гәзит-журналдар, китап уҡырға яраттым. Әле лә, күҙҙәр насар күреүенә ҡарамаҫтан, ваҡытлы матбуғаттан айырылмаҫҡа тырышам."Киске Өфө"гә өс йыл элек балалар яҙҙырғайны, хәҙер йыл да үҙем почтаға барып яҙылам. Ошо йылдар эсендә гәзит яҡын дуҫыма әйләнде.**

Өйөмә килгән 5 дана баҫма араһында иң яратып уҡығаным - "Киске Өфө". Тик көттөрөп кенә килә шул. Ҡайһы бер баҫмалар көн аша килеп торһа ла, тиҙ генә уҡыла һәм, күп осраҡта, уҡылған әйбер иҫтә лә ҡалмай. Ә "Киске Өфө"нө дөбөр-шатыр (беҙҙең яҡта ҡабаланыуҙы, ашығыуҙы аңлата) уҡыу мөмкин түгел. Унда баҫылған һәр мәҡәләне ашыҡмайынса ғына, һәр һүҙҙең мәғәнәһен, асылын төшөнөп, халыҡса әйткәндә, "тәмләп" кенә уҡып сығырға кәрәк.

Кем нисектер, әммә мин гәзиттәрҙе һәм журналдарҙы аҙаҡҡы битенән башлап уҡыйым. "Киске Өфө"нө лә шулай итәм. Тәүҙә республикалағы мәҙәни хәбәрҙәр менән танышып сығам, аҡыллы фекерҙәр уҡып алам. Шулай уҡ сканворд сисеү ҙә оҡшай. Ләкин, ҡыҙғаныска күрә, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе бөтөнләй белмәйем. Шуға ла киләһе һандағы яуаптарҙы көтөп алып, хәтеремә һалып ҡуям һәм ҡайһы саҡта ҡулланып та ебәрәм. Бабай: "Бигерәк уҡымышлы булып киттең, әбей, һинең менән һөйләшеүе лә ҡурҡыта башланы әле ул", - тип шаярта. Ә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһы аҫтында сыҡҡан һәм беҙҙең яҡтарҙа ҡулланылмаған һүҙҙәрҙе ҡушып, берәй хәбәр әйтеп ебәрһәм, "Минең әбей сит телде лә яҡшы белә ул", - ти. Бына шулай, "Киске Өфө" ҡартайған көнөбеҙҙә күңелдәрҙе лә күтәрә.

Шулай уҡ гәзит битендә донъя күргән хикәйәләрҙе яратып уҡыйым. Эй, кешенең шул тиклем дә оҫта яҙыуына һоҡланам - һәр хикәйә икмәккә яғылған майҙай шыма уҡыла.

Монолог, диалогтар ҙа ҡыҙыҡлы. Һәр береһен уҡып барам. Ләкин ни өсөндөр һәр ваҡыт йә ғалим, йә артист, йә эшҡыуар, йә берәй етәксе, йә уҡытыусы менән әңгәмәләр ҡораһыҡҙы. Тәмле сәйегеҙгә ябай һөнәр эйәләрен дә саҡырһағыҙ шәп булыр ине. Әлбиттә, бәлки уларҙың ҡуҡҡа күтәрелеп маҡтаныр уныштары ла юҡтыр, ләкин нәҡ уларҙың тырыш һәм намыҫлы хеҙмәте беҙҙең донъяны ҡотайта, яҡтырта. Мәҫәлән, ул рубриканы "Был һандың ҡунағы" тип атарға мөмкин. Ябай водитель, урам һепереүсе, урмансы, мал ҡараусы, һауынсы, еләкемеш үҫтереүсе һәм башҡа һөнәр эйәләре менән ҙур булмаған мәҡәлә эшләгәндә, шәп булыр ине, тип уйлайым. Беҙгә, ябай уҡыусыға, уларҙың көн итеүе, хыялдары, ынтылыштары ҡыҙыҡлы буласаҡ.

Бына ошондай минең фекерҙәрем һәм теләгем. Артабан да бар республика халҡын ҡыуандырып иждад итегеҙ, балалар. Фекерҙәрегеҙ тослоғон, ҡәләмдәрегеҙ үткерлеген ташламаһын.

**Хәмәйрә инәйегеҙ ВӘЛИУЛЛИНА. Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан халыҡ һорауы буйынса республикала спиртлы эсемлектәр етештереү эшен көйләү тураһындағы законға үҙгәрештәр индерелә, ул урындарҙа араҡы һатыуҙы сикләү, кәрәк икән - тыйыу мөмкинлеген күҙҙә тота. Бындай ҡарарға мөнәсәбәтегеҙ нисек?

(Башы 1-се биттә).

*Рәйсә АБДРАФИКОВА, һатыусы:* Туғандар ярҙамында ауылда магазин астыҡ, ирем менән бергәләп бишенсе йыл арыу ғына эшләйбеҙ, шөкөр. Бурыстарыбыҙҙы ла ҡайтарып бөттөк. Һәр бер сауҙа нөктәһендәге кеүек, беҙҙә лә араҡы һатыла, ни эшләйһең - үтемле тауар, һүҙ ҙә юҡ. Ләкин беҙ араҡыны табыш килтереүсе төп тауар итеп ҡарамайбыҙ, беҙҙең магазин универсам тибында. Унда аҙыҡ-түлектән башҡа тауарҙар ҙа һатыла. Ауыл ерендә бик кәрәкле булған хужалыҡ-көнкүреш тауарҙарына өҫтөнлөк бирергә тырышабыҙ. Әле бына араҡы һатыуҙы сикләү йәки бөтөнләй тыйыу ихтималлығы тураһындағы яңылыкты ишетеп, ирем көйөнөп киткәйне лә, мин уны бик тиҙ тынысландырҙым. Ә нинә көйөнөргә? Беҙҙең үҙебеҙгә лә рәхәт түгел күрәләтә ағыу һатып, уның нимәгә килтереп терәүен күреп тороуы. Күҙ алдында юҡҡа сығалар бит әзмәүерҙәй ир-егеттәребеҙ шул араҡыға алданып... Аҡсаһы булмаһа ла килеп инә бит улар. Үләм бит, һылыу, бурысҡа бир инде бер генә ярты, тип инәләләр, аяғында саҡ баҫып тора ҡайһыһы. Йәлләп бирәһең инде, йә ошонда ятып йән бирер, тип тә ҡурҡыла. Унан йәрәйһең яҙып биргәненде түләтә алмай. Бик теңкәгә тейҙе был эскелек. Мин хатта бөгөндән араҡы һатмаҫҡа ризамын, ауылдаштар нисек хәл итер бит... Хәҙер йәй, унан көҙгә уныш мәле етә, Алла бирһә. Әйҙә, витамин ашап киләһенһен ауылдаштар - күберәк еләкемеш, йәшелсә ҡайтартырбыҙ, тип өгөтләйем иремде. Бесән, баҡса мәлен күҙҙә тотоп, эш ҡоралдары, йорт-хужалыҡ кәрәк-ярағы тағы ла күберәк. Эсеп ятмаһындар әле, файҙалы эшкә тотонһондар. Ауыл халҡына арзанлыраҡ кейемһалымын да ҡарарбыҙ. Әле бына таныш тәьминәтсе аша Үзбәкстанда, Ҡырғыҙстанда етештерелгән кизе-мамыҡ туҡыманан ҡатынҡыҙ, балалар кейемдәренә, таҫтамалдарға заказ биреп ҡайттым. Ҡыҫҡаһы, халыҡ мәнфәғәте өсөн эшләйем, тигән кешегә йүнен биреп тора Аллаһы Тәғәлә - һатып алыусыһыҙ, табышһыҙ ултырмабыҙ, тик араҡы һатып, муйындан бурысҡа, унан бигерәк гонаһына батып ултырырға ғына теләмәйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланды. Был миҙгелдең башында Рәсәй почтаһының матбуғат баҫмаларына яҙылыу хаҡын ҡырҡа күтәреп ебәреүе сәбәпле арыу ғына тетрәнеү кисергәйнек. Бына әле уның "емештәрен" татып торабыҙ: "Киске Өфө" гәзите лә, башҡа баҫмалар ҙа үҙҙәренең байтаҡ уҡыусыһын юғалтты.**

Ә шулай ҙа күптәр өйҙәренә аҙна һайын килә торған дуҫ һәм фекерҙәштен юҡлығын тойоп, почта бүлексәләренә йүгерер, тигән өмөт бар әле. Гәзитебеҙҙе августан алдыра башлар өсөн 17 июлгә тиклем яҙылып өлгөрөргә кәрәк, тип кенә иҫкәртмәксебеҙ. Биш айға 50665 индексы гәзитебеҙ 423 һум 10 тингә генә төшәсәк.

**Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы тәҡдим иткәйнек. Апрель, май, июнь айҙары өсөн йомғаҡ яһайбыҙ.**

Ошо айҙарҙа 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Роберт Ғәйзуллин, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Хәснулла Ерьесов, Баймаҡ ҡалаһынан М. Байрамғолов, Сибай ҡалаһынан Нурғәле Юнысов, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Сәләх Әхмәтов, Нуриман районы Түбәнге Субай ауылынан М. Ғафаров - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**;

Баймаҡ районы Ярат ауылынан Тәлғәт Ишбаев, Баймаҡ ҡалаһынан Сәғәҙәт Азаматов, Миәкә районы Әбеш ауылынан Гөлнара Ғирфанова, Ҡыйғы районы Ибрай ауылынан Х. Шигапова, Салауат районы Арҡауыл ауылынан Мөслимә Муғтабирова, Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан Рәфҡәт Моратов - **"История башкирского народа"**;

Ейәнсура районы Үтәгол ауылынан Н. Ниязғолова, Ишембай ҡалаһынан Гәҙилә Хәйбуллина, Ф. Мәҡсүтова, Мәләүез ҡалаһынан Р. Лоҡманова, Мәсетле районы Юныс ауылынан С. Мөхәрләмова, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Ф. Аҡҡусҡарова, Бөрйән районы Байназар ауылынан Фәнүзә Аҙанғолова, Әтек ауылынан Зәбирә Ҡужабаева, Баймаҡ районы Сәйғәфәр ауылынан Фирҙәүес Мырҙабулатова, Иҫке Сибай ауылынан Миҙхәт Йәнъегетов, Учалы районы Озерный ҡасабаһынан Нәйрә Ишмөхәмәтова, Өфө ҡалаһынан Н. Насырова, Шишмә районы Түбәнге Ябалаҡлы ауылынан Ф. Райманова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**;

Йылайыр районы Байғужа ауылынан Динә Ҡоҙашева, Мәләүез ҡалаһынан Рәфҡәт Айытҡолов, Әбйәлил районы Әбдрәш ауылынан Ш. Хасанова, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, Бишбүләк районы Аҙнай ауылынан Р. Кирәйева, Хәйбулла районы Мәмбәт ауылынан Фәрит Мәмбәтов, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Р. Насырова, Бөрйән районы Ҡолғона ауылынан Ш. Нуретдинова, Салауат районы Лағыр ауылынан Земфира Йәнтүрина, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан Тәнзилә Ғәбитова - **Гөлнур Яҡуповаңың "Төш юрау китабы"**;

Сибай ҡалаһынан Бәхтейәр Ҡулибаев, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Дәүләкән районы Ҡыҙрас ауылынан Х. Әхмәтйәнов, Ҡырмыҫҡалы районы Мөҡай ауылынан Рәйфә Файрушина, Ҡырмыҫҡалы ауылынан А. Ҡусҡарова, Ишембай ҡалаһынан З. Ғәбәйҙуллина, Нуриман районы Байгилде ауылынан А. Фазлетдинов, Әбйәлил районы Красная Башкирия ауылынан Р. Аҫылғужина, Ейәнсура районы Бикбирҙе ауылынан Ҡасим Янбаев, Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылынан Б. Гәлина, Садовый ҡасабаһынан М. Ишемғолова, Өфө ҡалаһынан Фәниә Күсекҡолова, Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Х. Хафизов, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Көнһылыу Насретдинова - **"Башкортса дини календарь" китаптарына лайыҡ булды.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Федерацияһының илселәре һәм даими вәкилдәре кәңәшмәһендә сығыш яһаны. Ултырыш Рәсәйҙең милли ихтыяжарын яҡлау, халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең нигеҙҙәрен нығытыу мәсьәләләренә арналған. "Беҙгә дипломатиябыҙҙың көнсығыш векторын көсәйтеүҙе дауам итергә, илебеҙҙең артабанғы үҫеше мәнфәтендә Азия-Тымыҡ океан төбәктәренең йоғонтоло потенциалын көсәргәнешле ҡулланырға кәрәк, - тип билдәләгән Владимир Путин. - Һәм быға, һис шикһеҙ, алдағы Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында Рәсәйҙең рәйеслеге һәм Өфөлә 2015 йылдың йәйендә ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәреү йоғонто яһаясаҡ".

✔Өфөнөң "Болоттар" Заманса сәнғәт үҙәгендә "Бәхетле билет" ҡала социаль проектының фотокүргәҙмәһен асыу тантанаһы үтте. Ҡаланың Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы һәм БР Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил тарафынан ойошторолған акция баш ҡаланың интернат учреждениеларында булған балаларға ғаилә табыу маҡсаты менән ойошторолған. Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, Өфөлә йыл башынан алып етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 3592 бала теркәлгән. Баш ҡаланың интернат учреждениеларында 401 бала тәрбиәләнә, ҡалғандары алмаштырыусы һәм ҡарауға алыусы ғаиләләргә урынлаштырылған.

✔Бөрйән районы Советы Рөстәм Шәриповты контракт буйынса район хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Әлеге көнгә тиклем ул Бөрйән районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары булып эшләгән. Рөстәм Динислам улы Шәрипов 1982 йылдың 29 июлендә Бөрйән районының Яңы Мөсәт ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтын һәм БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.

✔2015 йыл Рәсәй Федерацияһында әҙәбиәт билдәһе аҫтында үтәсәк. "Рәсәй Федерацияһында Әҙәбиәт йылын үткәреү тураһында"ғы Указға РФ Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған. Документҡа ярашлы, шуның менән йәмғиәттең иғтибарын әҙәбиәткә һәм уҡыуға йәлеп итеү планлаштырыла.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҠАҒИҘӘЛӘР ҺАНҒА ҺУҒЫЛМАЙ...

**Дөрөҫ һөйләү һәм яҙыу ҡағиҙәләре тураһында һүҙҙе дауам итеп, уларҙың ҡайһы берҙәренең һанға һуғылмауын, хатта инҡар ителеүен әйтеп үтке киләм.**



Мәктәп дәреслектәрендә - бер төрлө, ваҡытлы матбуғатта - икенсе, ғилми баҫмаларҙа өсөнсө төрлө ҡағиҙәләр ҡулланыла, дөрөҫөрәге, улар һуңғыларында ҡулланылмай ҙа башланы. Ҡағиҙәләр үҙгәргән хәлдә лә, улар барыһы өсөн дә дөйөм, уртаҡ булырға тейеш. "Ниңә ошонда өтөр ҡуйманың?"- тигән һорауға "Беҙҙә шулай ҡабул ителгән!" тип ебәрәләр. Ҡағиҙәләрҙе үҙ белдегең менән үҙгәртергә яраймы ни? Бәй, улай булғас, һәр бер ойошма, учреждение хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре нисек теләй, шулай яҙырға тейеш булып сыға бит. Тел ғалимдарының хеҙмәтен юҡҡа сығарыу, туған телеңде ихтирам итмәү була ла баһа был. Аҙаҡ ғәмәлдә ҡулланмағас, улайһа, ниңә мәктәптә уҡыусылар дөрөҫ яҙырға һәм һөйләргә өйрәнә һуң?

Мәҫәлән, "Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң..." тип башланған һөйләмдәрҙә мотлаҡ өтөр кәрәк (ҡушма һөйләмдәге ваҡыт эйәрсән һөйләм). Был һөйләмдәге хәбәрҙе "ҡушылғас", "ҡушылыу менән" тип тә үҙгәртергә мөмкин, барлыҡ осраҡтарҙа ла өтөр ҡуйыла. Рус телендәгеһендә, киреһенсә, өтөр кәрәкмәй: "После присоединения Башкортостана к Русскому государству..." Әлеге лә баяғы, руссаһында юҡ, тип ҡуймайҙар инде был тыныш билдәләрен, руссаға эйәреү сәскә ата бит инде беҙҙә. Тағы бер тапҡыр ҡабатламай булмай: башҡорт һәм рус телендәге һөйләмдәрҙә өтөр, һыҙыҡ, ике нөктә билдәләре ҡуйылышы бар осраҡтарҙа ла тап килеп бөтмәй.

Башҡортса һөйләшә белмәгән быуын үҫеп килгәндә, өтөр ҡайғыһымы, тип уйлайҙыр, бәлки, ҡайһы берәүҙәр. Башҡорт теле ЮНЕСКО тарафынан бөтөп барған телдәр рәтенә индерелгәс, үҙ телендә икмәк-тоҙлоҡ һөйләшә белгәс - еткән, шул үҙе үк ҙур еңеү, тип тә фекер йөрөтөргә мөмкин. Әммә беҙҙең алда, мәктәптә ҡағиҙәләрҙе өйрәнеү кәрәкме, тигән һорау торорға тейеш түгел. Морфологияны, грамматиканы һ.б. өйрәнмәйенсә, әҙәби телдә дөрөҫ яҙып һәм һөйләп булмай. Улар һис тә телмәргә ҡамасау түгел, киреһенсә, ярҙам ғына. Башҡа телдәрҙә һөйләшкән кешеләр бындай һорау ҡуймай, сөнки был - абсурд фекер. Бер өтөрҙө дөрөҫ ҡулланмау арҡаһында кеше ғүмере өҙөлөргә мөмкин, тип өйрәтә торғайнылар беҙҙе уҡығанда. Миҫал итеп, билдәле һүҙбәйләнеште килтерә торғайнылар: ярлыҡарға, ярамай язаларға! Ярлыҡарға ярамай, язаларға! Тәүге һөйләмдәгесә өтөр ҡуйһаң, кеше тере ҡала; икенсеһендәгесә ҡуйһаң, уны язаға тарттыраһың. Бер төрлө һүҙҙәр менән бирелгән батша әмерендә өтөр ниндәй ҙур роль уйнай! Төрлө тыныш билдәләрен ҡуйыу бер үк һөйләмдең мәғәнәһен бөтөнләй үҙгәртеп ебәрә. Быны беҙ "Иғтибар, балалар!" һәм "Иғтибар: балалар!" һөйләмдәре миҫалында ла күҙәтә алабыҙ. Тәүге осраҡта һөйләмдең мәғәнәһен туранан-тура балаларға өндәшеү тип ҡабул итһәк, икенсеһендә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге буйынса ололарға иҫкәртеү, тип аңлайбыҙ.

Беҙ рус телен китаптан ҡағиҙәләр буйынса өйрәнгәнгә лә, диктантты гел "5"-кә яҙа торғайныҡ. Ә инде һөйләргә өйрәнеү өсөн күберәк аралашырға кәрәк, бында ҡағиҙәләр "ғәйепле" түгел. Һөйләргә, нигеҙҙә, әҙәбиәт дәрестәрендә өйрәтәләр. Әҙәби китаптарҙы күп уҡыу шулай уҡ телмәрҙе үҫтерә, һүҙ байлығын арттыра. Балалар хәҙер башҡортса әҙәби әҫәрҙәр уҡыймы һуң? Шулай уҡ, йәш быуындың башҡорт телендә яҡшы һөйләшеүе ата-әсәнән дә тора: улар ғаиләлә балалары менән етерлек аралашамы, төрлө темаларға әңгәмәләшәме, башҡортса сараларға йөрөтәме, унда бергәләп ҡатнашамы? Бар ғәйепте мәктәпкә, уҡытыусыға, хатта тел ғалимдарына япһарыу дөрөҫ түгел. Башҡорт телен уҡытыу буйынса методика иҫкергән икән, 60-70 йәшлек оло ғалимдарыбыҙҙың китаптары оҡшамай икән - яҙығыҙ һуң яңы методик ҡулланмалар! Бармы ул әсбап яҙырлыҡ йәш телселәр, методистар?

Мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәте - көн һайын 1-2 сәғәт, ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте - аҙнаһына 1-2 сәғәт уҡытыла. Шул арала ғына баланы башҡортса яҡшы һөйләшергә өйрәтеп буламы ни? Башҡорт теле дәреслектәрендә "ТҮ" - "телмәр үҫтереү" тигәнде аңлатыусы тамға менән бирелгән күнегеүҙәр бихисап. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгәндә, барлыҡ кластарҙа ла шиғыр ятлап, уны яттан яҙа, ижади эш, иншалар яҙа инек, хатта йырлай ҙа торғайныҡ. Ошолар бөтәһе лә телмәр үҫтереүгә йүнәлтелгән бит инде.

"Тел биҫтәһе", "телгә бөткән", "теле телгә йоҡмай" тиҙәр һөйләү йәһәтенән оҫта кешегә. Был һәләт атай-әсәй, олатай-өләсәй, туғандары, тиҫтерҙәренә, йәғни баланы уратып алған мөхиткә бәйле, улар бәләкәйҙән телмәр үҫтереүҙә, әүҙемлек, ҡыйыулыҡ тәрбиәләүҙә булышлыҡ күрһәтә. Гәзит-журналдар, телевидение ла дөрөҫ телмәр формалаштырыуҙа өлгө булып тора, шуға күрә уларҙа һис кенә лә хаталарға урын булырға тейеш түгел. Мәҫәлән, мәктәп дәреслектәрендә -"нг", - "нк" хәрефтәренә бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда "ы" хәрефе өҫтәлә, тигән ҡағиҙә бар: митингыла, танкыла. Ә киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре ул ҡағиҙәне бар тип тә белмәй: митингта, танкты тип яҙа, һөйләй. Башҡорт телендәге һүҙҙәргә бер нисә тартынҡы йәнәш килеү хас түгел, улар араһына мотлаҡ һуҙынҡы өн килеп "ҡыҫыла". Шулай уҡ "ск" тип бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда ла башта "и", "ы" ҡуйырға кәрәк: Белогорскиға отпускыға, киоскыла, дискыны. Телде һындыра-һындыра Белогорскка отпускка, киоскта, дискты тип һөйләйҙәр бит әй телевизорҙан. Аптырайым, был ҡағиҙә урта кластарҙа уҡ өйрәтелә лә баһа...

Рус телендә йөҙ йыл элек ниндәй ҡағиҙәләр сыҡҡан, шулар бөтөн ерҙә лә үтәлә, бер кем дә үҙгәртмәй; мәктәптә өйрәнмәҫкә кәрәк, тигән кеше лә юҡ. Ә ниңә беҙҙә дөрөҫ яҙыу (орфография), дөрөҫ һөйләү (орфоэпия), пунктуация һәм стилистика ҡағиҙәләре һанға һуғылмай? Ярай, уларҙы мәктәптә тырышыптырмашып өйрәнделәр ҙә, хатта ятлап алдылар, ти. Ләкин уның менән генә эш бөтмәй, өйрәнгәнеңде аңлы рәүештә ғәмәлдә ҡуллана белергә лә кәрәк бит. Шул уҡ ваҡытта дөрөҫ, матур, төҙөк һөйләмдәр төҙөп, кеше араһында ҡыйыу телмәр тота ла белергә тейешһең. Иң ауыры, ысынлап та, шулдыр. Боронғо Греция, Рим дәүләттәрендә мәктәптәрҙә балаларға риторика, логика дисциплиналары юҡҡа ғына уҡытылмағандыр, күрәһең. Элек беҙҙә лә революцияға тиклемге гимназия, хатта яңыса уҡытылған мәҙрәсә программаларында ошо предметтар булған. Бәлки, шул тәжрибәне тергеҙергә кәрәктер, хәҙерге заманда ата-әсәнең үҙ балаһы менән шөғөлләнергә ваҡыты ла, теләге лә, мөмкинлеге лә булмағас... Риторика, логика буйынса башҡортса әсбаптар бармы бының өсөн? Әгәр әлеге тормош шуны талап итә икән, ундай ҡулланмаларҙы төҙөргә кәрәк. Был дәрестәрҙә балаларҙы тасуири һөйләргә, үҙ фекерен әйтеп бирергә өйрәтәләр. Билдәле ораторҙар сыҡмаһа ла, башҡорт балалары аудитория алдында ҡаушап ҡалмаҫ, белгән нәмәһен дә әйтә алмай тормаҫ, үҙ фекерен дәлилдәр менән иҫбат итә алыр ине. Күмәкләгән - яу ҡайтарған, тигәндәй, ошо юҫыҡта ең һыҙғанып эшләргә әле беҙгә.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## БАШҠАЛАРҘЫ ИШӘЙТӘБЕҘ

– Беҙҙең районда бына ҡырҡ йыллап инде бер чечен ир йәшәй. Башҡортлашып бөткән инде ул, ҡатыны ла башҡорт. Урындағы халыҡты бик тә хөрмәт итә, беҙҙең барлыҡ мәҙәни сараларҙа ҡатнаша, башҡортса ла, чеченсә лә йырлай. Шул ғаиләне гәзитегеҙгә яҙһағыҙсы... - тип һоҡланыуынан сәсәй-сәсәй хәбәр еткерҙе бер танышым.

- Балалары бармы һуң?

- Өс ул тәрбиәләп үҫтерҙеләр...

- Әсәләре башҡорт булғас, Башҡортостанда йәшәгәс, уландары башҡортса һөйләшәлер?

- Һөйләшәләр, буғай. Тик улар үҫеп, уҡып сыҡҡас, аталарының ватанына - Чечен республикаһына күсеп киттеләр, чечен ҡыҙҙарына өйләнделәр...

...Милләт әсәләре шулай башҡа милләткә балалар үҫтерә, башҡа милләтте ишәйтә.

Кемгә нисек, әммә мин был хәбәрҙән ултырып иланым...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Интернетта башҡорт текстары өсөн башҡорт телендә Bashkort.org системаһы тест режимында эшләй башланы. Сайтты эшләүселәр башҡорт телен белгән ҡулланыусыларҙы тест үткәреүгә ҡушылыуҙарын һәм табылған хаталар тураһында хәбәр итеүҙәрен һорай. Сайтта шулай уҡ Мәскәү дизайнеры Илдар Кинйәбулатов әҙерләгән башҡорт шрифтын күсереп алыу мөмкинлеге бар.

✓ Башҡортостандың агросәнәғәт комплекстарында эшләүсе 16 йәш белгес дәүләт ярҙамын алыуға конкурс буйынса һайлап алыуҙы үтте. Уларҙың 11-е юғары һөнәри белемгә, тағы ла бишәүһе - урта белемгә эйә. Конкурста Башҡортостандың 14 районынан бөтәһе 20 кеше ҡатнашҡан. Ауыл хужалығы предприятиеларында эшләүсе йәш белгестәр бер тапҡыр бирелә торған пособиеға һәм эш хаҡына ай һайын өҫтәмә түләүгә иҫәп тота ала. Юғары уҡыу йортон тамамлаусылар өсөн бер тапҡыр бирелә торған пособиеның күләме 100 мең һум, мәктәп һәм колледждар өсөн - 60 мең. Шулай уҡ эш хаҡына ете мең һәм дүрт мең һум күләмендә ай һайын өҫтәмә аҡса ҡаралған.

✓ Башҡортостан халҡы июлдә бер көнгә күберәк ял итәсәк. Республика Хөкүмәте 28 июлде ял көнө тип иғлан итте, был көндө мосолмандар Ураҙа байрамын билдәләй.

✓ Өфөлә Ҡөрьән уҡыусыларҙың конкурсы үтте. БР Мосолмандарының Үҙәк диниә назараты хәбәр итеүенсә, бәйгегә илдең төрлө мөйөштәренән 120 ҡатнашыусы йыйылды, уларҙың иң йәшенә биш йәш. Конкурс еңеүселәре: Арсен Фәрүәзев (Өфө), Диана Хәмзина (Силәбе), Дахи Исмәғилев (Өфө).

✓ Яҡынса мәғлүмәттәргә ярашлы, быйыл Башҡортостанда 130-ҙан ашыу сығарылыш уҡыусыһы аттестатһыҙ ҡаласаҡ. Улар иҫәбендә резерв көндәрҙә - 18 һәм 19 июндә рус теле һәм математика буйынса мотлаҡ Берҙәм дәүләт имтиханында минималь сикте үтә алмаусылар ҙа бар. Бөтә мәғлүмәттәрҙе эшкәрткәндән һуң был һандың бер аҙ төҙәтелеүе мөмкин.

✓ 12 июлдә Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы" тәбиғи паркында "Байыҡ" Республика балалар конкурсы үтә. Һайлап алыу турында өс йәштән ун биш йәшкә тиклемге 500-ҙән ашыу бала ҡатнашты. Был юлы Мәскәү һәм Сургуттан да ҡатнашыусылар буласаҡ. Башлана 16 сәғәттә.

**“Башинформ”дан.**

*✓ Хакимиəттəрҙең бүлектəрендə эшлəгəн һəм дəүлəт башҡорт телен белгəн хеҙмəткəрҙəр булыу-булмауына ла иғтибар иттек. Эшкə ҡабул иткəндə хеҙмəткəрҙең дəүлəт телдəрендə аралаша алыу-алмауына ла иғтибар йүнəлтелһен ине.*



ИЛ-ЙОРТ ХƏБƏРЕ

## БЕСƏН САБА БЕЛƏҺЕҢМЕ?

**Тəүге тапҡыр республикала бесəн сабыу фольклор байрамы ойошторолдо. Сара Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар ауылы эргəһендəге аҡланда уҙҙы.**

Байрамдың төп маҡсаты - район биләмәһендә йәшәгән халыҡтарҙың бесән сабыу йолаларын тергеҙеү. Һуңғы йылдарҙа бесәнде техника ярҙамында әҙерләйҙәр, әммә ойоштороусылар быуындан-быуынға күсеп килгән оҫталыҡты хәтергә төшөрөргә, тергеҙергә һәм балаларға күрһәтергә теләне. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, район хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Исмәғилева байрам ҡунаҡтары булды.

Сара барышында иң яҡшы бесән сабыусы конкурсы уҙғарылды. 16 кеше, улар араһында өс ҡатын-ҡыҙ ярышты. Аҡһаҡалдар етәкселегендәге талапсан жюри ағзалары тиҙлекте генә түгел, ә сабыу сифатын да баһаланы.

Аҡланда төрлө оҫталыҡ кластары ойошторолдо. Иң оҙон сәс толомы конкурсында ҡыҙҙар сәскәләр һәм сағыу таҫмалар менән сәс үреп күрһәтте. Үләнсе-табиптар дауалау алымдары, үләндән дарыуҙар эшләү тураһында һөйләне. Сара Дуҫлыҡ кәбәнен өйөү һәм уның тирәләй әйлән-бәйлән уйнау менән тамамланды.Райондың фольклор коллективтары - башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш, мордва вәкилдәре бесән сабыу миҙгеленең башланыуы менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәрҙе күрһәтте, милли аш-һыу, үлән сәйе, айран менән һыйланы, йырҙар, таҡмаҡтар менән дәртләндерҙе. "Ҡырмыҫҡалы районында фольклор байрамына яҡшы, позитив старт бирелде. Бесән сабыу байрамы ваҡиғалы туризм өлкәһендә Башҡортостандың бренд сараһына әйләнәсәк, тигән ышаныстабыҙ", - тип хәбәр иттеләр БР Мәҙәниәт министрлығынан.

## ҠАРА СИҢЕРТКƏ ЯУЫ

**Башҡортостанда ҡара сиңерткәгә бәйле ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителгән территорияның майҙаны 50 мең гектарҙан артты, тип хәбәр итте Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының республика буйынса баш идаралығы начальнигының беренсе урынбаҫары Закир Хужәхмәтов.**

Әлегә биш районда ғәҙәттән тыш хәл режимы иғлан ителгән, матди зыян, яҡынса баһалауҙар буйынса, 10 миллион һумға яҡынлаша. Тағы бер район - Хәйбулла - юғары әҙерлек шарттарында эшләй. Былар ғәҙәттән тыш хәл режимын төбәк кимәлендә индерергә нигеҙ бирә.

БР ауыл хужалығы министры урынбаҫары Владимир Незнанов әйтеүе буйынса, ауыл хужалығы культураларын эшкәртеү технологияларын үтәмәү, ҙур майҙанды биләгән һөрөнтө ерҙәрҙең эшкәртелмәүе ҡороҡостарҙың киң таралыуына килтергән төп сәбәптәр булып тора.

Билдәләнеүенсә, Урал аръяғында фитосанитар хәл күҙаллanғанға ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ. Мәғлүмәттәр буйынса, тикшерелгән 283 мең гектарҙың 198-ен ҡара сиңерткәләр баҫып алған.

- Химик эшкәртеү ваҡытын файҙаланып ҡалмағанда ҡанатланыу стадияһында ҡара сиңерткәләр көнөнә 20-30 саҡрым үтә ала, был уларҙың таралыуына тағы ла бер сәбәп булып тора, - тип билдәләне Владимир Незнанов.

БР буйынса "Рәсәй ауыл хужалығы үҙәге" филиалы етәксеһе Рөстәм Кирәев, саранча кеүектәрҙең таралыуын иҫкәртеү буйынса тулы масштаблы фитосанитар саралар үткәреү өсөн 45 миллион һум аҡса талап ителә, тине. Федераль үҙәк бөгөнгө көндә тик 2 миллион һум ғына аҡса бүлгән.

...ҒƏҘƏТТƏРЕ КҮРКƏМ

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Хатаһыҙ ҡала" дөйөм ҡала конкурсына йомғаҡ яһалды. Бынан 8 йыл элек был сара тәүҙә ҡала урамдарында, сауҙа нөктәләрендә, алтаҡталарҙа, тауар ярлыҡтарында һәм башҡа ерҙәрҙә күҙгә төртөп инеп барған хаталарҙы асыҡлаусы иң әүҙем граждандарҙы тәбрикләүҙән башланғайны. Икенсе йылына уҡ ул ҡоласын киңерәк йәйеп, ике этаптан үткәрелә башлай һәм унда дәүләт телдәренә тейешле кимәлдә иғтибар биргән иң яҡшы предприятие һәм ойошма, иң яҡшы ҡала районы билдәләнә.**




# ХАТАЛАРҘАН ЙӨҘӨҢ ҠЫҘАРМАҺЫН, ӨФӨМ!

Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, конкурс "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР законын тормошҡа ашырыу, ҡаланы зауыҡлы һәм хатаһыҙ итеү маҡсатынан ойошторола. Сара барышында ҡаланың барлыҡ хужалыҡ тармаҡтарына методик һәм ғәмәли ярҙам күрһәтелә.

Конкурс барышында 9 төркөм баһалама ағзалары баш ҡаланың 300-ҙән ашыу учреждениеһын, предприятиеһын, ойошмаһын (мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт, ЗАГС, йәштәр сәйәсәте һәм спорт, һаулыҡ һаҡлау, сауҙа, хеҙмәт күрһәтеү, реклама, сәнәғәт һәм иҡтисад, транспорт, элемтә, төҙөлөш һәм архитектура, коммуналь һәм торлаҡ хужалыҡ), шул иҫәптән ҡала райондарының "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссиялары эшмәкәрлеген тикшергән.

Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф бүлегенең телдәр сәйәсәте буйынса бүлек етәксеһе Зөлфиә Ханнанова белдереүенсә, бөтөн райондарҙа ла тиерлек, Октябрь районынан башҡа, Законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссияларҙың яуаплы секретарҙары алмашынған һәм был хәл уйланырға мәжбүр итә. Киров, Октябрь, Калинин, Совет райондары хакимиәттәре ошо йүнәлештә эште яҡшы ойошторған. Ғөмүмән, һәр райондың үҙенең раҫланған эш планы бар һәм эшмәкәрлек уларға ярашлы алып барыла. Шул уҡ ваҡытта Орджоникидзе районының эш планы хакимиәт башлығында раҫланмаған һәм саралар бары тик мәғариф өлкәһенә генә ҡағыла. Ҡайһы бер райондарҙа документтарҙы һаҡлау буйынса эш яйға һалынмаған, был йәһәттән Октябрь районы өлгө булып тора - уларҙа тотош архив бар. Район комиссиялары республика, ҡала норматив акттары, методик әсбаптар һәм һүҙлектәр менән тәьмин ителгән.

- Барлыҡ район хакимиәттәрендә лә дәүләт телдәрендәге республика һәм ҡала матбуғат баҫмаларына яҙылыу тейешле кимәлдә ойошторолған. Әммә Өфө ҡала округында башҡорт телендә сыҡҡан һәм республика зыялылары араһында абруй ҡаҙанған берҙән-бер "Киске Өфө" гәзитен Киров районында (йылдың тәүге яртыһына 373 кеше яҙылған) һәм Совет районында (213 кеше) ғына сағыштырмаса күпләп яҙҙырталар. Өфө райондары хакимиәттәрендә был баҫманы берәр дана ғына алдыралар, Дим һәм Калинин райондары хакимиәттәрендә "Киске Өфө"гә бөтөнләй яҙылмайҙар, - тине Зөлфиә Миңлебай ҡыҙы. - Компетентлы жюри әҙерләгән критерийҙар буйынса, шулай уҡ хакимиәттәрҙең бүлектәрендә эшләгән һәм дәүләт башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәр булыу-булмауына ла иғтибар иттек. Тейешле хеҙмәттәр эшкә ҡабул иткәндә хеҙмәткәрҙең милләтенә генә түгел, ә уның дәүләт телдәрендә аралаша алыу-алмауына ла иғтибар йүнәлтһен ине. Юҡһа, "Телеүҙәк" тапшырыуына башҡортса һөйләшә белгән теләһә ниндәй бүлек кешеһен ебәрәләр. Ләкин кеше ни тиклем эрудит булмаһын, торлаҡ хужалығы белгесе һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә ҡағылышлы һорауҙарға лайыҡлы яуап бирә аламы ни?..

Бындай тәҡдим баһалама төркөмө етәкселәренең сығыштарында ла ҡабат-ҡабат һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Шулай уҡ башҡорт телен белгән белгестәргә өҫтәмә түләүҙәр булдырыу тураһында ла әйтеп үтелде. Ә хакимиәттәрҙә компетентлы тел белгестәренең булмауы хәҙер инде етәкселәрҙе түгел, ә мәғлүмәт таҡталарының, алтаҡталарҙың үҙҙәрен "ҡыҙарырға" мәжбүр итә. Ленин, Дим, Орджоникидзе райондары хакимиәттәрендәге орфографик, грамматик, стилистик хаталар быға асыҡ дәлил. Ә бит балыҡ башынан серей - хакимиәттәрҙә хаталарға юл ҡуйыла икән, тимәк, етәкселәрҙең дәүләт телдәренә мөнәсәбәте лә шундай. Бында бер генә миҫал килтереп китеү урынлы булыр, моғайын. Мәҫәлән, Орджоникидзе районы хакимиәтенең алтаҡтаһындағы хатаны төҙәтергә бынан ике йыл элек әйтелгән булһа ла, йөк һаман урынында тора - "ағайҙар" мыйыҡ та бормаған.

Шулай уҡ, башҡа етешһеҙлектәр менән бер рәттән, баш ҡала мәктәптәренең береһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлмәһененең цоколь ҡатында урынлашыуы ла, башҡорт теле сәғәттәренең икенсе фәндәргә бирелеүе лә телгә алынды. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов быны дәүләт теленә булған мөнәсәбәт, тип баһаланы һәм мәсьәләне үҙ контроленә алып, мәғариф идаралығына яңы уҡыу йылына тиклем уны хәл итергә ҡушты. Ә инде эш барышында асыҡланған етешһеҙлектәр буйынса һәр ойошма-предприятиеға аныҡ тәҡдимдәр ебәреләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туғыҙ йүнәлеш буйынса тикшереү йомғаҡтарынан сығып, еңеүселәр түбәндәгесә билдәләнде: III дәрәжә диплом һәм 25 мең һумлыҡ сертификат менән - Калинин районы хакимиәте, II дәрәжә диплом һәм 30 мең һумлыҡ сертификат менән - Октябрь районы хакимиәте, I дәрәжә диплом һәм 50 мең һумлыҡ сертификат менән Киров районы хакимиәте бүләкләнде. Совет, Ленин, Дим, Орджоникидзе райондары хаикимиәттәрен дәртләндереү маҡсатында уларға димпломдар һәм 10-ар мең һумлыҡ сертификаттар тапшырылды.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ə Б Ə Р Ҙ Ə Р Е

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2014 йылда мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһен үткәреү тураһында бойороҡ ҡабул итте. Был юлы педагогтар советы Салауат ҡалаһында үтәсәк.

✓"Алексеевский" совхозында иртә өлгөрөүсе кәбеҫтәне йыйыу башланды, тип хәбәр итә БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Был культура биләгән ике гектарҙан 300 центнер самаһы йәшелсә алырға планлаштыралар.Көн һайын баҫыуҙарҙан йәшелсә үҫтереүселәр биш мең тоннанан ашыу кәбеҫтә оҙата. Иртә өлгөрөүсе кәбеҫтә һаҡлау өсөн яраҡһыҙ булғанға күрә, уны әҙер продукция келәтенән шунда уҡ һатыуға ебәрәләр.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә капиталь ремонт үткәреүгә дәүләт ярҙамы күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Дәүләт ярҙамы милекселәрҙең күп фатирлы йортто капиталь ремонтлауға һайлаған аҡса йыйыу алымына ҡарамаҫтан бүленәсәк. Торлаҡ хужалары 10 июлгә тиклем күп фатирлы йорттарҙың дөйөм мөлкәтен капиталь ремонтлау өсөн аҡсаны йыйыу ысулы менән билдәләнергә тейеш: йәки "БР Төбәк операторы" иҫәбендә, йәки махсус иҫәп асырға. Түләмдәрҙе граждандар октябрҙән башлап түләй башларға тейеш: алты ҡатҡа тиклемге йорттарға дөйөм майҙандың бер квадрат метры өсөн 5 һум 20 тин һәм алты ҡаттан күберәк булған йорттарҙа дөйөм майҙандың бер квадрат метры өсөн 5 һум 80 тин.

✓Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәтенә 11 әҙәбиәтсе ҡушылды. Яҙыусылар ойошмаһының яңы ағзалары - шағирәләр Гөлнара Хәлфетдинова, Ғәлиә Кәлимуллина, өйрәнеүсе ғалим Гөлфирә Гәрәева, прозаиктар Рәйлә Сабитова, Нияз Алсынбаев, Марат Әминев, Мәхмүт Сәлимов. Татар секцияһы составына шағирә Ләйсән Яҡупова инде. Яңы әҙәбиәтселәрҙе ҡабул иткәндән һуң республиканың яҙыусылар ойошмаһында 260 кеше иҫәпләнә.

✓Ҡатмарлы янғын хәле июлдә Башҡортостандың көньяҡ урмандарында фараз ителә, тип хәбәр итә республика Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Уның параметрҙары уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән юғарыраҡ булыуы ихтимал. Волга буйы федераль округында юғары янғын хәүефе шулай уҡ Ырымбур өлкәһенең үҙәк өлөшөндә күҙаллана. Әлеге ваҡытта республикала урман янғындары юҡ.

✓ *Бейеү - ул бер үк хәрәкәтте берҙәм ҡабатлау икәнен беләбеҙ. Тимәк, балаларыбыҙ бөтәһе бер төптән ҡуҙғала ала һәм был халҡыбыҙҙың берҙәмлеге сағылышы булды...*



*АФАРИН!*

# ЯҠШЫЛЫҠ БУЛҺЫН АТЫҒЫҘ...

## йәки "Урал батыр" эпосының башҡорт асылын булдырғаны



**Сәсән булған ерҙә һүҙ ҡала, ти халыҡ аҡылы. Ошо көндәрҙә, ниһайәт, республика райондары буйлап сәйәхәт итеп, киренән Бөрйән районына әйләнеп ҡайтыусы "Урал батыр" эпосын башҡарыусы балаларҙың республика ярышынан һуң ниндәй һүҙ ҡалыуын үҙ ҡолағыбыҙ менән ишетеп, һеҙгә лә еткерергә булдыҡ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.**

Ун алтынсы тапҡыр уҙғарылған ярышта республиканың 40 районынан һәм 9 ҡалаһынан килгән ике йөҙҙән ашыу уҡыусы сәсәнлек, актерлыҡ оҫталыҡтарын, йыр-бейеүгә маһирлығын яңғыҙ һәм команда сығыштарында һынаны. Белгестәр әйтеүенсә, һәр конкурс ваҡыт уҙыу менән үҙенән-үҙе көрсөккә килеп терәлә. Ул осраҡта яңы юлдар эҙләмәйенсә сара ҡалмай. Әммә "Урал батыр" эпосын башҡарыусы балаларҙың республика бәйгеһе, гүйә, Йәншишмә һыуына ҡойонғанмы ни! Ун алтынсы тапҡыр үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, әле лә ҡатнашыусыларҙы, жюри ағзаларын һәм тамашасыларҙы хайран итеүенән туҡтамай.

- Уҡыусылар йыл дауамында ашҡынып көтөп алған сара быйыл да бағланған өмөттәрҙе аҡланы, - тип, үҙ фекерҙәре менән бүлеште БР мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиева. - Инаныуымса, "Урал батыр" эпосын тулыһынса ятлаған балалар туған теленә, тыуған иленә, үҙҙәрен уратып алған донъяға ҡараштарын ошо эпос аша формалаштыра, улар битараф була алмай. Ун алты йыл эсендә был конкурста биш меңгә яҡын бала ҡатнашҡан, бөгөнгө көндә 6 йәшлек ҡыҙ эпостың 3500 юлын ятлаған һәм был конкурсҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу йылдан-йыл арта бара икән, тимәк, киләсәгебеҙ өмөтлө, тип әйтергә мөмкин...

Әйткәндәй, Учалы районы Байрамғол ауылынан килеүсе иң кескәй ҡатнашыусы - алты йәшлек Ләйсән Золотарева конкурсҡа бер йыл эсендә әҙерләнгән. Тырыш ҡыҙыҡайға башта өләсәһе, һуңынан атаһы Ирек Әсҡәт улы эпосты ятларға ярҙам итә. Хәҙер Ләйсән үҙе лә уҡырға өйрәнгән: "Урал батыр"ҙы үҙем уҡып ятлап бөтәсәкмен. Миңә уны иҫтә ҡалдырыуы ауыр түгел. Конкурс бик оҡшаны, күп малайҙар-ҡыҙҙар менән таныштым, үҙем кеүек бәләкәс ҡыҙыҡай менән дуҫлашып алдыҡ", - тип һөйләй ҡыҙ. Бәләкәйҙәр төркөмөндә көс һынашҡан Ләйсән әлегә мәктәп уҡыусыһы булмағанға күрә, төп призға дәғүә итә алманы, әммә уның сығышын күҙәткән һәр кемде ул шиғри юлдарҙы шартлатып һөйләүе менән генә түгел, дәртле бейеүҙәре менән дә һөйөндөрҙө.

Иң йәш сәсәндәр араһында беренсе урынды Республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Фәрүәз Әлибаев һәм Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡыусыһы Алһыу Хәйбуллина бүлеште. Өлкәндәр төркөмөндә ярышыусылар араһында иң юғары һөҙөмтәгә Йылайыр районынан Снежана Асаинова һәм Учалы районынан Зарина Әминева өлгәште. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең XVI республика конкурсы еңеүсеһе тип Салауат районы Әлкә урта мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Илнар Зарипов танылды. Илнар сәхнәнән килеп төшөү менән журналистар уны ҡотларға, тәьҫораттары менән ҡыҙыҡһынырға ашыҡты.

- Мин 6-сы синыфта уҡыған сағымда "Урал батыр" эпосының 500 юлын башлап ятлағайным, - тип һөйләне Гран-при яулаусы егет. - Йылдан-йыл уҡытыусым Гөлсөм Имамова етәкселегендә оҫталығымды арттыра барып, быйыл тәүге тапҡыр республика кимәлендә сығыш яһаным. Конкурстан һәм Шүлгәнташ мәмерйәһенә экскурсиянан алған тәьҫораттар әйтеп бөткөһөҙ! Һығымта яһап шуны билдәләр инем, "Урал батыр" эпосының һәр юлында халҡыбыҙҙың тарихы, ғөрөф-ғәҙәте, тәрбиәһе сағылған. Әгәр һәр башҡорт балаһы уны бәләкәй сағында уҡып сыҡһа, өйҙә ул иң кәрәкле китап һаналһа, киләсәк быуын өсөн борсолмаҫҡа мөмкин.

Илнар менән һөйләшкәндән һуң, бер олоно, бер кесене тыңла, тигән аҡылға таянып, баһалама комиссияһы ағзаларынан конкурсҡа һығымталар яһауҙарын үтендек.

- Бөгөн беҙҙең был майҙан киләсәккә байҡау яһаусы старт. Алдағы көндәрҙә лә беҙҙә ошондай ҡыуаныслы майҙандар, дуҫтар майҙаны ғына йыйылыуын теләйем, - тип башланы һүҙен жюри рәйесе, филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Сөләймәнов. - Быйылғы конкурстан шәхсән үҙем өсөн шундай күренеш иҫтә ҡалырлыҡ булды: әлшәйҙәр сығыш яһаған ваҡытта "Барығыҙ ҙа бейергә төшөгөҙ!" тип саҡырыу ташлағайны, балалар уларға дәррәү ҡушылды. Бейеү - ул бер үк хәрәкәтте берҙәм ҡабатлау икәнен беләбеҙ. Тимәк, балаларыбыҙ бөтәһе бер төптән ҡуҙғала ала һәм был халҡыбыҙҙың берҙәмлеге сағылышы булды...

"Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире, жюри ағзаһы Салауат Кәримов тел, мәҙәниәт, рух байрамы булараҡ үткәрелергә тейеш конкурсты тағы ла йөкмәткелерәк итеп уҙғарыу зарур булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Быйылғы саранан һәр кем үҙенсә һығымталар яһауға ҡарамаҫтан, барыһы өсөн дә "Урал батыр" эпосын башҡарыусы балалар конкурсы Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә үткәрелеп, бер-нисә йыл сәйәхәт иткәндән һуң, һәр ваҡыт Бөрйән еренә әйләнеп ҡайтасағын белеү иң мөһим яңылыҡ булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Урал батырҙың халыҡҡа ҡарап өндәшкәндә: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ" - тигән һүҙҙәре мәңгелеккә башҡорт халҡының менталитетын формалаштырған кеүек. Бөгөн башҡорт милләтенең ҡунаҡсыл, толерант, тыныс холоҡло булыуы борон-борон заманда аманат итеп әйтелгән һүҙҙәргә тоғро ҡалыуынан киләлер. Балаларыбыҙ ҙа ошо эпостағы аҡылды, тарихты, кәңәштәрҙе бәләкәйҙән күңелдәренә һеңдереп үҫһә, дошман күҙен ҡыҙҙырып балҡып ятыр бағ булған еребеҙ, илебеҙ ышаныслы ҡулдарға ҡалырына шик юҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## БАШЛАНДЫ!

**Республикала рәсми рәүештә мөһим һәм хәл иткес ваҡиғаға - 14 сентябргә тәғәйенләнгән һайлауҙарға старт бирелде. Был хаҡта Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев белдерҙе.**

Комиссия рәйесе төрлө кимәлдәге һайлауҙарға ҡағылышлы һайлау ҡануниәтендәге үҙгәрештәр һәм яңылыҡтар менән таныштырҙы. Атап әйткәндә, Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһына кандидаттар бары тик федераль законға ярашлы һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә сәйәси партиялар тарафынан ғына күрһәтелергә тейеш. Республикала шундай 52 фирҡә бар. Икенсе яңылыҡ - муниципаль "иләк". Йәғни дәүләт башлығы булырға теләүсе кандидат 48 муниципаль район һәм ҡала округы депутаттарының хуплауын алырға, йәғни ошо кимәлдәге депутаттарҙың 457 тауышын йыйырға тейеш.

Быйылғы һайлауҙарҙа ла бюллетендәрҙә "барыһына ла ҡаршы" графаһы булмаясаҡ. Был графа 2006 йылдан бөтөрөлгәйне. Ләкин, ҡануниәткә ярашлы, 2015 йылдың 1 ғинуарынан урындағы үҙидара органдары депутаттарын һәм вәкәләтле вазифаларға һайлағанда был графа буласаҡ. Һөҙөмтәләр буйынса, әгәр һайлау округында иң күп тауыш йыйған кандидатҡа ҡарағанда күберәк һайлаусы бөтә кандидаттарға ҡаршы тауыш бирһә, һайлауҙар булманы, тип таныласаҡ.

Әлеге көнгә "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһенән - Рөстәм Хәмитов, "Рәсәй патриоттары"нан - Илдар Бикбаев, "Граждандар көсө"нән - Раил Сарбаев, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - Константин Шаһиморатов, ЛДПР-ҙан - Иван Сухарев, "Рәсәй Федерацияһының Коммунистар партияһы" Башҡортостан республика бүлексәһенән - Юнир Ҡотлоғужин, "Рәсәй коммунистары"ның Башҡортостан республика бүлексәһенән Рәсих Хәмитов ваҡытынан алда Башҡортостан Президенты һайлауҙарында ҡатнашыуы тураһында белдереп, республиканың Үҙәк һайлау комиссияһына документтарын тапшырған. Кандидаттарҙы күрһәтеү 9 июлгә тиклем дауам итәсәк.

## ҠАҺАРМАН АТА-ӘСӘГӘ

**БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай депутаттары БР "Дәүләт наградалары һәм маҡтаулы исемдәр тураһында"ғы Законды "Ата-әсәләр ҡаһарманлығы" миҙалын алыуға хоҡуҡтары булған граждандар категорияһын билдәләүсе пункт менән тулыландырырға тәҡдим итте.**

Был ҡарар Дәүләт төҙөлөшө, хоҡуҡ тәртибе һәм суд мәсьәләләре буйынса комитет ултырышында ҡабул ителде. "Ата-әсәләр ҡаһарманлығы" миҙалы республикаға дан килтергән, ҡаһарманлыҡ күрһәткән йәки кеше ғүмерен ҡотҡарыу өсөн батырлыҡ эшләгән, фәндә, ижадта, спортта йәки башҡа ижтимағи мөһим эшмәкәрлектә айырым ҡаҙаныштарға эйә булған балалар тәрбиәләгән ата-әсәләргә, шул иҫәптән уллыҡҡа алғандарға, опекундарға, ҡарап үҫтереүселәргә биреләсәк. Шулай уҡ өс һәм унан да күберәк ғәрип баланы, алты һәм унан да күберәк етем йәки ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған баланы уллыҡҡа алған ғаиләләр бүләкләнәсәк. Был законды ҡабул иткән осраҡта парламентарийҙарға дәүләт наградаһына аҡсалата бүләкте күҙ уңында тотҡан акттарҙы ла билдәләргә кәрәк буласаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Эренле хроник сей яра

❖ Ҡаты итеп бешерелгән йомортҡа һарыһы, 1 ҡалаҡ аҡбур, 1 ҡалаҡ дегет, 2 ҡалаҡ һөт өҫтө. Яҡшылап болғатырға. Яраның өҫтөнә бәйләргә. Көнөнә 2 тапҡыр алыштыралар, был ваҡытта яраны йылы һыу йәки 3 процентлы водород перекисы менән эшкәртергә, киптерергә.

❖ 40-60 грамм прополисҡа 200 мг көнбағыш майы ҡойорға, 60-70 градусҡа тиклем йылытырға, ошо температурала 1 сәғәт тоторға. Йылы көйөнсә һөҙәләр. Дауаланыу түбәндәгесә: яра 3 процентлы бор кислотаһы компрессы ярҙамында таҙартыла, һуңынан уға әҙер май һөртөлгән марля һалып бәйләнә. Бер тәүлектән һуң алыштырырға. Экзема барлыҡҡа килһә, дауалауҙы туҡтатырға, 3 процентлы бор килотаһы компресы һалырға. Экзема бөткәс, дауаны дауам итергә. Ике айҙан һуң яра бөтәшәсәк. Белгестәр был ысулды бик файҙалы тип иҫәпләй.

### Тотлоғоу

❖ 5 грамм рута үләненә 0,5 л ҡайнар һыу ҡойорға. Талғын утта 5 минут төнәтергә. Йылы төнәтмә менән ауыҙҙы һәм тамаҡты сайҡатырға, йотмаҫҡа. 2-3 аҙна буйына көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

❖ 20 грамм баҙыян үләненә һәм сәскәләренә (ясенец) 0,5 л ҡайнар һыу ҡойорға. 15-20 минут төнәтергә. 3-5 минут буйына ауыҙҙы сайҡатырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

❖ 3 тамсы баҙыян үләне һутына 2 тамсы кесерткән һуты өҫтәргә. Телгә һалып, 5 минут тоторға. Йоторға ярамай. 2 сәғәт һайын ҡабатларға. Дауаланыу курсы - 10 көн.

❖ 100-әр грамм кесерткән, аҡ сәскә, 50 грамм айыу ҡурайы (дягил) ҡомалаҡ тубырсыҡтары, мелисса үләне, арса (вереск) үләне һәм һары мәтрүшкә алырға. 1 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, яртышар стаканлап көнөнә 2 тапҡыр - иртән һәм кисен эсергә.

❖ Ҡолаҡтарығыҙҙы ҡаплап, ҡысҡырып йырлағыҙ. Ҡысҡырып китап уҡығыҙ. Был күңелһеҙ сирҙең үтеүен һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ, бының өсөн саҡ ҡына тырышырға кәрәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә үҙебеҙҙе лә, телебеҙҙе лә кәм күреүебеҙ ҡайҙан килә ул беҙҙең халыҡта? Үкенескә күрә, былар яуапһыҙлыҡ һәм вайымһыҙлыҡ билдәләре.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ

**Кәләш яғына килгәс, ҡоҙалар сәй әскән, һуңынан төп ҡоҙа уларҙы туғандарына таратып биргән. Элек туйҙа кейәү менән кәләш ҡатнашмаған.**

Тәүҙә табынға ҡымыҙ, бал йәки буҙа һалынған көрәгә (тәпән) алып сыҡҡандар. Уны аҡ шәл йәки буҫтау менән япҡандар һәм ҡунаҡтар араһынан бер кеше мал әйтеп, көрәгәне асҡан, ә шәлде үҙенә бүләккә алған. Туй табыны традицион ризыҡтарҙан торған. Бай ғаиләләрҙә махсус ҡаҙы тултырғандар - уның оҙонлоғо билде уратырлыҡ булған. Ҡайһы бер райондарҙа кәләштең оҫталығы ул бешергән сәк-сәккә ҡарап баһаланған. Көньяҡ-көнбайыш төбәктәрҙә оҙон һалмалы итле аш йәки ваҡ ҡына итеп яһалған билмәнле аш (кейәү билмәне) әҙерләнгән.

Туйға күстәнәс биҙәлгән махсус тоҡҡа - кәшен, сәрмәгә һалып килтерелгән. Кейәү сәйе икенсе көнөнә, кәләштең оло ағаһының йортонда үткәрелә. Оло еңгә яҡҡан мунсаға тәүҙә кәләш бара, еңгә уға татлы һыу эсереп, ҡалған һыуҙы ташҡа һибә. Кейәү мунса тәҙрәһенең төбөнә аҡса һалып сығарға тейеш була. Ҡайһы бер төбәктәрҙә кейәүҙе мунсанан ҡатлама менән ҡаршы алалар, ул уны тешләп, мунса яғына ташларға тейеш. Был ҡатлы ҡоймаҡты кем тотоп алған, шул яҡын арала өйләнә, тип теләгәндәр. Ҡоҙалар алып килгән бүләктәрҙе таратыу өсөн йыуаса сәйе (күстәнәс сәйе) йыйыла. Табындың ахырында йыуаса һандығы сығарыла. Йыуаса сәйендә сәрмә ҡағыу йолаһы үткәрелә. Бер ҡоҙаса бүләктәр ябылған буҫтауҙы үҙенә ала, кәләшкә мал әйтә һәм һандыҡтан күстәнәс һалынған тоҡто сығара. Ул сепрәктән, хатта йәнлек тиреһенән дә тегелергә мөмкин. Ҡоҙаса ошо тоҡто елкәһенә һалып, таҡмаҡ әйтеп бейей, бейегән саҡта кемгә тоҡ менән еңелсә генә һуғып китә, шул йәштәргә бүләк бирергә тейеш була. Ҡәйнәне батмуста бейетеү йолаһы булған, ҡарап тороусылар батмусҡа аҡса ташлаған. Итек үксәһенең таҡылдауы яуыз көстәрҙе ҡурҡыта, йәш ғаиләгә муллыҡ һәм ныҡлык килтерә, тип ышанғандар. Туйҙың икенсе көнөнә егет яғы алып килгән малды һуйып, туйлыҡ ашағандар, ҡайһы бер райондарҙа ул һыйһөн йәки һөйһөн тип йөрөтөлә. Был йоланың үҙенсәлеге шунда - кәләш һөйһөнгә алып килергән һарыҡтың итен ашарға тейеш түгел, йәнәһе, ул бының менән хайуандың нәфрәтен ала. "Һөйһөн ашаған һөйөшмәҫ" тигән мәҡәл ошонан килеп сыҡҡан булһа кәрәк.

Ҡоҙалар алып килгән һый менән һыйланғанда ҡунаҡтар менән хужалар урындары менән алышынған һәм ҡоҙалар үҙҙәре ашарға бешергән. Туй һимертеү тигән ҡыҙыҡлы йола ла булған. Ҡоҙалар алып килгән малды һуйған мәлдә ҡатын-ҡыҙҙар ҡунаҡтарҙы уның һимеҙлеген ҡарап килергә саҡыра. Был мәлдә ҡоҙаларҙы малдың эсәге менән "туҡмау" башлана. Ҡоҙаларға ҡарындыҡ ябыу йолаһы ла булған. Ҡунаҡтар аҡса түләп, был саранан ҡотола алған. Аҡса алғас, туй һимерҙе, тип иғлан иткәндәр. Һыу һатыу йолаһында ла ҡоҙаларҙы һынау дауам иткән, улар һыуға барған саҡта ауылдың ҡыҙҙары йылғаның үрендә һыуҙы болғандырған, ҡоҙалар шулай уҡ аҡса түләп, һыу һатып алған.

Һебә һөйәге тип аталған йола ла иғтибарға лайыҡ. Ике яҡтың көрәшселәре йылҡының йәки һарыҡтың һебә ҡабырғаһы өсөн көрәшкән. Әгәр ҙә ҡыҙ яғы еңеү яулаһа, кейәү башҡаса өйләнә алмаған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**"Киске Өфө" гәзитендә Мәрйәм Бураҡаеваның "Ысын мәҙәнилекте кем нисек аңлай?" мәҡәләһен, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында Шамил Кучуковтың "Ҡала башҡорто" тигән темаға арналған тапшырыуын ҡарағандан һуң тыуған уй-фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**



# ВАЙЫМҺЫҘ БУЛМАЙЫҠ...

## телебеҙгә, милләтебеҙгә

Хәҙерге глобалләшеү осоронда туған тел темаһы ысынлап та көнүҙәк мәсьәлә. Халҡыбыҙ донъя кимәлендә үҙенең ныҡлығына, көсөнә, рухына, йәшәйешенә һынау тота. Әлбиттә, милли мәктәптәр, мәҙәни үҙәктәр, театр, баҫмалар булдырыу яғынан ҡарағанда, ниндәйҙер кимәлдә дәүләт ярҙамы ла булырға тейеш. Әммә милләттең, туған телебеҙҙен киләсәге, иң беренсе сиратта, ата-әсәнән, олатай-өләсәйҙән, йәғни ғаиләнән килә. Балалар баҡсаһы, мәктәп бары был рухты үҫтерә генә. Бала ғаиләһендә туған телендә һөйләшеп, халҡының монон тыңлап, башҡортса әкиәттәр тыңлап, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе күреп үҫһә генә халҡын, телен ярата. Генетик кимәлдә был тойғо һәр бер башҡорт балаһында бар. Шулай булмаһа, Мәрйәм апай Бураҡаева ойошторған "Йәйләү" лагерында бер аҙ йәшәгәндән һуң, туған телдәрен белергә тырышыуҙарын, рухтарының күтәрелеүен, милли ғорурлыҡтарынын артыуын, ҡайтанан шул лагерға барырға ынтылып, атлығып тороуҙарын нисек анлатырға?

Күп кенә ата-әсәнең, үҙем телде белмәгәс, балаларым да белмәй, тип, үҙҙәрен аҡларға тырышыуҙарын һис кенә лә аңламайым. Туған тел - сит тел түгел, сит телде лә кеше өйрәнә, бары тик теләк булыуы фарыз. Балаң туған телендә һөйләшмәй икән, был һинең милләтеңә хыянатың тураһында һөйләй түгелме һуң? Бер танышым үҙе лә, ире лә башҡортса насар белә. Әммә балалары менән шул уҡ хәл ҡабатланмаһын өсөн, уны башҡорт балалар баҡсаһына, мәктәптә башҡорт синыфына бирепп, бергәләшеп башҡорт телен өйрәнделәр. Балаһы башҡорт бейеү ансамблендә бейергә өйрәнде. Хәҙерге көндә үҙ телен белеп, рухлы булып үҫеп килә, бик абруйлы юғары уҡыу йортонда белем ала. Инглиз телен дә һыу кеүек эсә. Икенсе танышым иһә, кинйә балаһын урыҫ синыфына уҡырға бирҙе. Үҙе уҡытыусы булып эшләгән был ҡатын да, ире лә өлкән балаларының ҡыйыуһыҙ, уҡыу яғына һүлпән булыуын башҡорт синыфында уҡыуына япһарып, ошо аҙымға барҙылар. Баланың шәхси сифаттары мәктәптә түгел, ғаиләлә формалашыуы тураһында былай ҙа күп һөйләйбеҙ. Үҙ милләтемдең алдынғы ҡарашлы кешеһенең был ҡылығы минең хәтеремде ныҡ ҡалдырҙы.

Телде үҫтереү өсөн дәүләт ярҙам итмәй, тигән фекерҙең киң таралған булыуы аптырата. Ни өсөн беҙгә йәшәргә күсеп килгән Кавказ халыҡтары милли мәктәптәре, театры, йәғни, үҙ мөхите булмаһа ла бөтөн ғаиләләре менән туған телдәрендә аралаша? Үҙ еребеҙҙә, үҙ илебеҙҙә үҙебеҙҙе лә, телебеҙҙе лә кәм күреүебеҙ ҡайҙан килә ул беҙҙең халыҡта? Үкенескә күрә, былар яуапһыҙлыҡ һәм вайымһыҙлыҡ билдәләре.

Һәр милләттең һәр кешеһе ата-бабалары, халҡы алдында оло бурыслы. Был бурысты ҡайтарыу өсөн балаң ғына түгел, уның балаһы ла туған телендә һөйләшергә тейеш. Мотлаҡ үҙ милләте кешеһе менән тормошон бәйләргә тейешлеген, нәҫелде дауам итеүсе ейән-ейәнсәрҙәрҙең үҙ туған телен белеп үҫеүҙәрен талап итергә кәрәк, сөнки, нисек кенә тырышһаң да, ҡатнаш никахта милләт төшөнсәһе юғала. Шуға гәзит-журнал биттәрендә лә сит милләткә кейәүгә сыҡҡан, ситкә өйләнгәндәрҙе күтәрмәләмәйек, кире ҡылыҡты рекламалаған кеүек килеп сыға был.

Үҙ милләтең менән ғорурланыу тойғоһо халҡыңдың тарихын белеү аша килә. Икенсенән, милләтебеҙҙең арҙаҡлы һәм абруйлы кешеләренең өлгөһө лә йәштәрҙе башҡорт телендә аралашыу, башҡорт булыу модала икән, тигән фекергә алып килә ала. Улар балаларын ысын башҡорт итеп тәрбиәләһә, рухлы булһалар, күпләп башҡорт баҫмаларын алдырһалар, быларҙың барыһы ла халҡыбыҙға ниндәйҙер ғилми эштәргә ҡарағанда ла күберәк файҙа килтерер ине.

Башҡорт мәктәптәрендә балалар үҙ-ара русса аралаша икән, бында ла рухи, милли тәрбиә насар ҡуйылыуы ғәйепле. Әгәр мәктәп директоры, һәр уҡытыусы бер йүнәлештә, үҙ өлгөләрендә тарихыбыҙ, батырҙарыбыҙ, милли мондарыбыҙ, халҡыбыҙ ижады аша балала ғорурлыҡ, милли яуаплылыҡ тәрбиәләргә тырышһа, һөҙөмтә көттөрмәйәсәк. Ана, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында милли тәрбиә көслө ҡуйылған, һәр бала башҡортса иҫәнләшә, башҡортса һөйләшә. Сәбәп уҡыусыларҙың ауылдан йыйылған булыуында түгел, ә дөрөҫ тәрбиәүи эш алып барыу һөҙөмтәһе, тип уйлайым.

**Гөлнар СЫНБУЛАТОВА.**

ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!

# "БАШҠОРТ САМОРОДОГЫ"



**Күренекле дәүләт эшмәкәре Муллайән Халиҡовтың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған саралар сиктәрендә уның тыуған яғында, Бүздәк ауылында ғилми-ғәмәли конференция үтте. Сараны ойоштороусы булып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Бүздәк районы хакимиәте сығыш яһаны. Конференцияла 19 райондан 500-ҙән ашыу делегат ҡатнашты.**

Конференцияны асып, Бүздәк районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Графит Ғаяз улы Шакиров район мәктәптәрендә, мәҙәниәт үҙәктәрендә Муллайән Халиҡовтың исемен мәңгеләштереү өсөн төрлө саралар даими үткәрелеп тороуын билдәләне. Артабанғы сығыштарҙа Муллайән Дәүләтшаһ улы Халиҡовтың көрәш юлына, сәйәси эшмәкәрлегенә байҡау яһалды. Уларҙың ҡайһы берҙәренән өҙөк килтерәйек.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Рәфҡәт улы Күсәбәев үҙ сығышында: "Тап федераль ҡоролош ҡына Рәсәйҙе тарҡалыуҙан ҡотҡарып алып ҡала икәнен һәр кемегеҙ белә. Ә был шәхес Рәсәйҙең федератив дәүләт булып китеүенә ҙур өлөш индергән кешеләрҙең береһе. Ул шулай уҡ башҡорт әлифбаһын төҙөүҙә ҡатнаша, БАССР-ҙа башҡорт телен дәүләт теле итеү тураһындағы мәсьәләне тәүгеләрҙән булып күтәреүсе лә. Башҡортостандың әлеге сиктәрҙә ҡалыуы һәм Өфөнөң республиканың баш ҡалаһы булыуы ла уның эшмәкәрлек емеше", - тине. Әммә шулай булыуға ҡарамаҫтан, мәктәп уҡыусылары өсөн Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте китаптарында был шәхес хаҡында ике-өс һөйләм менән генә сикләнелгән, тип борсолоуын да белдерҙе ул.

Тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев үҙенең сығышында билдәле дәүләт эшмәкәренең тормошо, уға замандаштары һәм беҙҙең замандаштар биргән баһалама менән таныштырҙы: "Муллайән Халиҡовта оҫта дипломат, етди етәксе һыҙаттары сағылыш таба, - тине ул. - Зәки Вәлиди һөйләшеүҙәр өсөн делегация башлығы итеп һәр саҡ уны ебәрә. Граждандар һуғышы ваҡытында ла, Башҡорт автономияһы төҙөлгәндә лә Муллайән Халиҡов әүҙем роль уйнай. Совет дәүләте тарафынан Башҡорт автономияһы һәм Үҙәк араһындағы килешеү боҙолоу сәбәпле ризаһыҙлыҡтарын белдереп, Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә күп кенә башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре илде ташлап китергә мәжбүр булғандан һуң да, был дәүләт эшмәкәре эшен дауам итә. Ул Башҡортостан Республикаһының төп идеологы булып ҡала. Абруйлы сәйәсмәнде "Башҡорт самородогы" тип йөрөтәләр. Ләкин Муллайән Халиҡовтың ғүмере лә шул

✓ **_Ыласындар бейеккә менеп, ҡорбанын күреп ҡалғас та уға уҡтай сөйөлә. Әммә башҡорт һунарсылары ыласындың һәләтен үҫтереүгә өлгәшә: уларҙың ыласындары, ҡарсыға шикелле, ҡорбаны артынан баҫтырып та һунар итә._**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ҠОШ СӨЙӨП ҺУНАР ИТЕҮ

**Халҡыбыҙҙың боронғо һунар төрө менән тарих фәндәре кандидаты Мирза Ғизетдин улы МУЛЛАҒОЛОВ таныштыра.**



Һунарҙа бер юлы төрлө төрҙәргә ҡараған ҡоштар ҡатнашыуын да билдәләп үтергә кәрәк. Ҡоштар хаҡында белеме булған кешеләр белә, ыласындар менән бөркөттәр ирекле тормошта дошманлашып йәшәйҙәр. Ләкин башҡорттар уларҙы шул тиклем өйрәтә, ҡанатлы йыртҡыстар төрлө төргә ҡарауҙарына ҡарамаҫтан, бергәләп, комплекслы һунар итә. Ике тәбиғи конкурентты бер маҡсатҡа йүнәлтеү һәм бер йүнәлештә тәрбиәләү йәнә бер тапҡыр башҡорттарҙың яҡшы ҡош өйрәтеүсе булыуын дәлилләй.

Күп ғалимдар башҡорттарҙың ҡош сөйөүҙә оҫталығы менән һоҡланһа ла, был күренешкә кире ҡараш тыуҙырырға тырышыусылар ҙа бар. С.Т. Аксаков, мәҫәлән, башҡорттарҙың был оҫталығына шик белдерә. Шулай уҡ ул, башҡорттар ыласындарҙы дөрөҫ өйрәтмәй, тип тә раҫлап маташа. Әлбиттә, уның был фекере башҡа бик күп Рәсәй һәм сит ил ғалимдары фекерҙәренә ҡаршы килә. Башҡорттар ҡоштарҙы насар эйәләштереүсе һәм өйрәтеүсе булһа, улар Александр II коронацияһы ваҡытында батша һунарына саҡырылмаҫтар ине. Әлеге сарала башҡорт ҡош сөйөү һунары яҡшы баһа ала. Өйрәтелгән бөркөт, ыласындарҙың сифатын уларҙың йәрминкәләрҙә юғары хаҡҡа һатылыуы һәм төрлө төбәк һунарсылары араһында ҙур һорау менән файҙаланылыуы тураһында һөйләй. Ҡоштарҙың тәбиғәтен боҙоп, уларҙы үҙҙәренә хас булмаған алымдар буйынса өйрәтеү буйынса тәнҡитен Аксаковтың ҡайһы бер деталдәрҙе белмәүенә йәки танырға теләмәүенә ҡайтарып ҡалдырырға була. Билдәле булыуынса, ыласындар бейеккә менеп, ҡорбанын күреп ҡалғас та уға уҡтай сөйөлә. Әммә башҡорт һунарсылары ыласындың тыумыштан килгән һәләтен үҫтереүгә өлгәшә: уларҙың ыласындары үрҙә әйтелгән кеүек кенә түгел, ҡарсыға шикелле, ҡорбаны артынан баҫтырып та һунар итә.

Башҡорттар шулай уҡ һунарҙа ҡарсығаны ла күп файҙаланған. Был ҙур булмаған ҡош башҡа ҡанатлы йыртҡыстарға ҡарағанда тиҙерәк өйрәтелә, хужаһына тиҙ эйәләшә. Ҡарсыға үҙенән ҙурыраҡ булған йәнлектәргә, ҡоштарға ҡурҡмайынса йәбешә. Кешенән дә ҡурмай. Ҡорбанын ҡыуып та, ыласындар кеүек бейеккә күтәрелеп тә тота. Шулай уҡ түҙемле ҡош: махсус урынға йәшенеп, ҡорбанын сәғәттәр буйы көтә ала.

Ҙурыраҡ йәштә ҡулға эйәләштерелгән йыртҡыс ҡоштар яҡшыраҡ һунарсылар, тип һаналған. Шуға күрә лә уларҙы бер аҙ үҫкәс, иркенлектә йәшәп, яҡшы һунар ҡошона әйләнгәс кенә тотоп, йорт һунарсыһы эшләгәндәр. Бында ла төрлө алымдар ҡулланылған.

Бөркөттө ҡырағай йыртҡыстан һунар ҡоралына әйләндереү күп тәжрибә, уны эйәләштереү ысулдарын, ҡош биологияһын белеүҙе талап иткән оҙайлы һәм ҡыйын процесс. Иң башта һунарсы ҡош балалары булған ояны эҙләп таба. Бөркөттәр һәр саҡ бер урында, башлыса урман ситендә, бейек ҡаяларҙа оялай. Оя ағас башына кейҙерелгән ҡалпаҡты хәтерләтә. Ҡошто аулағанда башҡорттар ҡоштоң ошо үҙенсәлеген файҙаланғандар ҙа инде. Етмәһә, ҡанатлы йыртҡыстар оялары тирәләй осоп йөрөүсән. Ҡош аулаусылар бөркөттәр күп осҡан урынды алдан уҡ билдәләп ҡуйып, уларҙың оя ҡороп, йомортҡа һалыуын көткән.

Ҡош балаларын ояларынан төндә алғандар. Әгәр ҙә оялар ҡаяларҙа урынлашҡан булһа, кеше уларға бер-береһенә ныҡ итеп бәйләнгән арҡандар ярҙамында төшкән. Бының менән тауға үрләүселәр (скалолаздар) шөғөлләнгән. Бөркөттәрҙе, шулай уҡ ыласындарҙы ояларынан алыу айырым оҫталыҡ талап иткән һөнәр булған. Баймаҡ районында экспедицияла булғанда шундай тарихҡа осраныҡ. "Бөркөттәрҙе ҡаяларҙағы ояларынан, ыласындарҙы алған кеүек үк, арҡандар ярҙамында алғандар. Был ҡурҡыныс һәм ҡатмарлы ғына эш булған. Бөркөттәр ояһын башлыса бейек ҡаяларҙың текә битләүҙәрендә, йылға үҙәндәрендә, кеше лә, йыртҡыстар ҙа бара алмаған урында ҡора. Өс-дүрт кеше тау башында оя тәңгәлләп ике йыуан, ҙур булмаған ҡаҙыҡ ҡаға. Уларҙың береһенә тәүге бауҙы бәйләйҙәр, икенсеһенә осона ултырғыс эшләп ҡалдырылған икенсе бауҙы урайҙар. Ҡош аласаҡ кеше битен һәм яурындарын ҡалын үгеҙ тиреһе менән ҡаплап, кәрзин алып, ошо бауҙағы ултырғысҡа ултыра. Башҡалар бауҙы яйлап төшөрә. Оя янына еткәс, теге кеше өҫтәге юлдаштарына тауыш бирә һәм ипләп кенә ҡош балаларын ала. Ғәҙәттә, ошо ваҡытта уға ыласындар йә бөркөттәр һөжүм итә башлай. Уларҙың тырнаҡтары шул тиклем осло, көслө була, хатта кеше өҫтөндәге үгеҙ тиреһен дә йырта, ҡош алыусыны яралай". Лепехин үҙ яҙмаларында был процесс хаҡында: "Ҡыйыу башҡорттар ... үҙҙәренең ҡулдарын, аяҡтарын һындыра, бәғзе берәүҙәре үлә", - тип яҙа. Ҡоштарҙы алыуҙың ошо алымы башҡорт риүәйәттәрендә лә бәйән ителә.

Оло ҡоштарҙы ла, уларҙың йәштәрен дә башҡорттар яҙын тоталар. Ауланған бөркөттөң сирағына бер аршын оҙонлоғонда ҡайыш бәйләйҙәр. Ҡайыштың икенсе осо элмәк менән бөтә. Элмәккә ҡошто тотор өсөн оҙон нәҙек, әммә ныҡ ҡыл бау кейҙерелә. Һунарсы оянан алынған себештәрҙе, бер нәмә лә ашатмайынса, күпмелер ваҡыт ситлектә тота. Ҡырағай ҡоштарға бер нисә көндән һуң ғына ҡош ите ашата башлайҙар.

Йәш бөркөттө ҡулға өйрәтер өсөн һунарсы уны көнө буйы башынан, муйынынан һыйпап, үҙе менән йөрөтә. Бөркөт балаһы ике килограмдан кәм тармай, тимәк, уны көнө буйы ҡулда йөрөтөү еңел булмай. Шуға күрә һунарсы, арығас та, ҡошто бәүелсәккә ултырта. Бәүелсәк сәңгелдәп, ҡошҡа йоҡларға ирек бирмәй. Йоҡоһо туймаған һәм ас ҡош хужаһын яҡшыраҡ тыңлай.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

---

осорҙағы бөйөк шәхестәрҙеке кеүек аянысլы өҙөлә. 1937 йылда совет властына террористик эшмәкәрлектә ғәйепләнеп атыла...

Муллайән Халиҡовтың туғаны Лиза Ғәлимйән ҡыҙы Ибраһимова ла үҙ хәтирәләре менән бүлеште. "Мин Муллайән Халиҡовты олатайымдың һөйләгәндәре буйынса ғына беләм. Ул бәләкәй саҡтан тырыш, ныҡышмалы булған, төндәр буйы китап уҡыған. Белемгә ынтылышы уны зыялы кеше иткән дә инде. Бер ваҡыт ауылға күрше Килем ауылынан бер бай килгән. Ул ауылдарындағы мәктәпкә рус телендә уҡытыр өсөн балалар йыйыуы тураһында белдергән. Һайлау Муллайән Халиҡовҡа төшкән. Ул шулай заманына күрә алдынғы мәктәптә уҡый башлаған. Бер нисә тиҫтә йылдан һуң мин дә ошо мәктәптә белем алдым. Ләкин ҡасандыр мәшһүр туғаным ошонда белем алғанын күҙ алдыма ла килтерә алмай инем. Сөнки мин бәләкәй саҡта, Муллайән Халиҡовтың исеме тыйыу аҫтында булғанға күрә, туғандарым, шул иҫәптән олатайым да уның тураһында һөйләп барманы. Ләкин ҡустыһын хәтергә төшөргән саҡтарында күҙҙәре йәш менән тула торғайны..." - тип хәтер һандығын асты Лиза Ғәлимйән ҡыҙы.

Шулай уҡ ғилми-ғәмәли конференция сиктәрендә мәшһүр дәүләт эшмәкәре тыуған ауылға ла сәфәр ойошторолдо. Иҫке Аҡтау ауылында Муллайән Халиҡовтың тыуған йорто бөгөн юҡ инде. Ләкин йорт нигеҙен уның туғандары һаҡлап килә. Ә ул тыуған йорт урыны ҡаршыһында "Башҡорт самородогы"на арналған музей эшләй. Музейҙа Башҡорт республикаһын төҙөүҙә ҡатнашҡан билдәле сәйәсмәндең шәжәрәһе, тормош юлы менән яҡындан танышырға мөмкин.

Шулай итеп, Бүздәк районында йәшәгән халыҡ боронғо башҡорт ырыуҙарының береһе - ҡаңлыларға ҡарай. Был ырыу вәкилдәре элек-электән Арал менән Урал араһына йәйелгән киң ерҙәрҙә көн күргән. Улар Урта Азияның бәшнәк-уғыҙ ҡәбиләләре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән. Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, бәшнәктәрҙең дәүләт элитаһы тап ҡаңлыларҙан торған... Ҡаңлы башҡорттары һәр заманда ла билдәле шәхестәре менән дан тотҡан, колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшкән ихтилал башлыҡтары ла, дәүләт эшмәкәрҙәре лә булған улар араһында. Миҫалға Рәсәй кимәлендәге депутаттары, адвокаттары, хәрбиҙәре булған билдәле Сыртлановтар династияһын килтереү ҙә етә. Муллайән Халиҡов та етәкселек һәм дипломатия нескәлектәрен яҡшы белеүе һәм оҫта файҙаланыуы менән ҡаңлы башҡорттарының традицияһын дауам итеүсе лайыҡлы вариҫ була. Шуға күрә лә уның исеме халыҡ хәтеренән юйылырға тейеш түгел.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Инйәр-ҡатай башҡорттарында тәҙрә уйыу ысулы - иғтибарымды йәлеп иткән берҙән-бер осраҡ булды. Унда барлыҡ йорттарҙың дә тәҙрәләре урамға ҡарай, ә ихата яғында бер генә тәҙрә лә юҡ ине. Бары тик бер ҡыйыҡ аҫтында ике буранан торған һәм солан менән тоташтырылған йорттарҙа ғына соландан бер тәҙрә ихатаға сыға. Был осраҡта тәҙрәләрҙең шулай урынлашыуы бары тик урындағы шарттар менән генә аңлатыла. Инйәр-ҡатайҙарҙың ауылдары күпселек осраҡта йылға, шишмә буйында үҙәндең текә йәки һөҙәк ярында урынлашҡан. Шуға күрә йорт стеналарының бер яғы икенсеһенә ҡарағанда бейегерәк; тау яғына ҡараған стенала тәҙрәләр ерҙән бик бейек уйылмаған, ҡаршы яҡта, киреһенсә, бейектә булған (һүрәт). Ҡышҡыһын тау яғына ҡараған стена яртылаш йәки ҡыйыҡҡа тиклем ҡар менән ҡаплана, шуға күрә ул яҡта тәҙрә уйылмай.



Даими торлаҡта ишек яңаҡҡа (ҡап) ултыртыла. Ул тәпәш була, тышҡа ҡарай асыла. Ишек бейек йәки уртаса тупһалы. Башҡорттар ишекте бер ваҡытта ла урам яғына уймаған. Ул һәр саҡ ихатаға ҡараған.

Һәр урында буранан ғына торған, күтәрмәһеҙ, төкәтмәһеҙ йорттар осрай (һүрәт). Әгәр өй нигеҙҙә ултырһа йәки иҙәне ерҙән бейектә булһа, был осраҡта мотлаҡ күтәрмә кәрәк. Бик йыш осраған күтәрмә пароход трабына оҡшаш. Икенсе төр күтәрмә нәҙек бүрәнәләрҙән һәм брустарҙан ғибәрәт. Иң өҫкө бүрәнәгә таҡта түшәлеп, бәләкәй генә майҙансыҡ яһала (һүрәт). Йыш ҡына былдай күтәрмәләрҙең тотоноп менергә яндауыры була.





Солан ике төрлө эшләнә: йә ингән ерҙә ике йәки өс яғынан стена менән уратып алынған япманан тора, йә өй ҡыйығы алға сығарылып, һалындырылып ябыла һәм күтәрмәне ҡаплай. Һуңынан күтәрмәнең тирә-яғы йоҡа таҡталар менән көпләнә һәм күтәрмә ябыҡ соланға әүерелә. Төньяҡ башҡорттарында, ғәҙәттә, күтәрмә бураның буйынан-буйына эшләнә. Күтәрмәнең мөйөштәренә бағаналар ултыртыла һәм улар ҡыйыҡты тотоп тора. Ике бағана араһы төрлө материал менән көпләнә.

Ҡайһы берҙә солан ике бура араһында булып, бер ҡыйыҡ менән ябылғанда, соландың ике яҡ стенаһы ролен бураларҙың берәр яғы үтәй. Ике бура араһындағы стена ла бүрәнәнән күтәрелә һәм уға тәҙрә уйыла. Ғәҙәттә, дүртенсе стена булмай йәки уны таҡта стена алмаштыра. Бындай солан алдына күтәрмә ҡуйыла. Солан эшләү материалдары һәм ысулдары төрлө. Ағас һәм саман йорттарҙа солан бик йыш ситәндән була йәиһә буранан бурала. Йылы булһын өсөн үрелгән ситән эсенән йыш ҡына ҡамыш ҡуйыла (һүрәт).



**Өйөңдәге хәлде күршеңдән һора, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап ятып, камиллашыу, үҫеү, донъяға ҡарашыңды киңәйтеү хаҡында онотоп, барыһы ла яҡшы, барыһы ла шәп, тип, тыныс ҡына йәшәргә лә мөмкин. Ләкин тирә-яҡтағыларҙың һинең (илең, дәүләтең, милләтең) хаҡында нимә уйлауын, үҙҙәре нисек көн итеүен белеү өсөн бер аҙ ил гиҙеп, танышлыҡтар булдырып, кеше менән аралашып алыу ҙа ҡамасауламай. Ҡаҙағстандың Туран ҡаласығында уҙғарылған Бөтөн донъя төрки халыҡтары ассамблеяһының VI съезы эшендә Башҡортостан, башҡорт халҡы исеменән ҡатнашып ҡайтҡан милләттәшебеҙ, академик, философ Фәнил ФӘЙЗУЛЛИНдың тәьсораттарын һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ.**

## "Нух кәмәһе" йыйҙы төркиҙәрҙе

Туран ҡаласығы Бөйөк Ебәк юлында, Ташкент ҡалаһынаса - 60, Шымкентҡа тиклем - 25, Ҡырғыҙстанғаса - 70, Тажикстанғаса - 260, Төркмәнстанғаса - 600, заманында гөрләп торған Төркөстандан 200 километр алыҫлыҡта урынлашҡан. Беҙ тауҙар араһында тирмәләрҙә йәшәнек. Ҡаршыла ғына матур тау тора. Ҡаҙаҡтар әйтеүенсә, йәнәһе, Нух бәйғәмбәрҙең кәмәһе шунда килеп туҡтаған. "Уны Арарат таһәтенән рухи байрамын үткәреү.

Йәшерен-батырыны юҡ, төрки халыҡтары саманан артыҡ баҫалҡы, шул арҡала үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ, киләсәгебеҙ хаҡында бөтөн донъяға ҡысҡырып, оран һалып, үҙебеҙҙе күрһәтә белмәйбеҙ. Быуаттар буйына йәшәп килгән традицияларыбыҙҙы онотабыҙ. Мәҫәлән, Туран - иң оло цивилизацияларҙың береһе булып тора. Төркиҙәр Монголиянан башлап Молдоваға тиклем ҙур территорияға таралған халыҡ. Улар 2 мең йыл элек үк бергә, берҙәм йәшәгән. Фольклор материалдарында ла Тәңре осрай. Әммә СССР тарҡалғандан һуң төрки халыҡтарының бәйләнештәре өҙөлөп ҡалды. Башҡортостанда, Татарстанда башҡорт һәм татар артистарының концерттарынан башҡа төрки вәкилдәренең сығыштарын күрмәйбеҙ тиерлек. Элек Үзбәкстан, Ҡаҙағстан һ.б. менән мәҙәни бәйләнештәребеҙ була торғайны. Минеңсә, бөгөн ошо халыҡтар араһында мәҙәни генә түгел, иҡтисади, сәйәси бәйләнештәр булдырыуға кәрәк. Әлбиттә, сәйәсәткә тығылырға тейеш түгелбеҙ, тибеҙ. Мипубликаларҙан, башҡа халыҡтарҙан делегациялар дүрттән дә кәм түгел, яҡуттар 13 кеше, хатта Канаданан вәкилдәре килгәйне. Әзербайжандан һәр береһе 12-шәр кешенән торған ике делегация булды. Делегациялар составында яҙыусылар, шағирҙар, билдәле журналистар бар ине. Татарстандан китаптар тейәп килгәндәр. Молдова ғағауыздарының етәксеһе - Молдова парламентының депутаты. Башҡортостандан был йыйында бер үҙем ҡатнаштым. Сара барышында һәр делегация үҙ халҡының мәҙәниәтен күрһәтергә тейеш ине. Ике көн буйы концерт ойоштороҙолар. Республиканан яңғыҙым булғас, Мостай Кәримдең бер шиғырын һәм Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын уҡып ишеттерҙем. Иң мөһиме - аралашыу үҙ телебеҙҙә алып барылды һәм бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ. Нуғайҙар, балҡарҙар, ҡараимдар башДөйөм кәңәш ҡорғандан һуң ҡасандыр депортацияға эләккән халыҡтар Рәсәй Президенты В.В. Путинға, Федерация Советы Рәйесе В. И. Матвиенкоға, РФ Дәүләт Думаһы Рәйесе С. Е. Нарышкинға хат яҙып, Бөтөн донъя төрки халыҡтары ассамблеяһы уларҙы хуплауын белдерергә тейеш, тигән ҡарар сығарҙыҡ.

Был съезда тағы бер принцип иғтибарҙы йәлеп итте: ниндәй милләттән булыуыңа ҡарамаҫтан, һин тиң хоҡуҡлы һәм башҡалар менән тиң. Сөнки халыҡтың бөйөклөгө уның һаны менән билдәләнмәй, эшләгән эштәре менән баһалана. Хатта был ҡаласыҡта һәр бер төрки халҡына урын бүлеләр һәм улар шунда үҙҙәренең йортон һалырға, йәғни бында һәр милләттең үҙенең резиденцияһы булырға тейеш, тинеләр. Башҡорттарға резиденция өсөн ҡаласыҡҡа инә торған ерҙәге иң матур урындарҙың береһен

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ икенсе ҡанаты

уына килеп туҡтаған тип тә раҫларға тырышалар, һеҙ үҙегеҙгә алырға маташаһығыҙ", - тип көләм. "Ә беҙ бында ҡаҙыныу эштәре алып барып, иҫке, серегән кәмәләрҙә таптыҡ", - тип яуапланы ҡаҙаҡтар. Шул тауҙы беҙҙең Торатауҙай изге тау тип йөрөйҙәр. Башына хатта ҙур, матур итеп Нух кәмәһен эшләп ултыртҡандар. Ирекһеҙҙән, Өфөлә табылған "Башҡорт" ҡалаһы, йәғни "Өфө-II" ҡаласығы хәтергә килә. Уны ла бит шундай туристик комплекс итеп эшләргә мөмкин һәм был эш оҙаҡҡа һуҙылмаһын ине.

Сараға килгәндә, ул быға тиклем Мәскәүҙә, Төркиәлә, Татарстанда, Сыуашстанда, Ҡаҙағстанда үткәрелеп, проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеү, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләү маҡсатында саҡырылған бер йыйын булды. Тәү сиратта төрки халыҡтарын, географик, территориаль сиктәргә ҡарамайынса, бер-береһенә яҡынлаштырыу, бер-береһе менән бәйләнештәрҙе нығытыу, донъя кимәлендә берләштереү, шул уҡ ваҡытта уларҙың киләсәге тураһындағы идеяларҙы туплап, бер концепцияға һалыу торҙо. Икенсе төп мәсьәлә: халыҡтарҙың өлгәшкән уңыштарын (телде үҫтереүҙә, мәҙәниәт проблемаларын хәл итеүҙә) башҡаларға таратыу, тәжрибә уртаҡлашыу, кәрәккәндә, ярҙам итеү. Өсөнсөһө - донъя кимәлендә төрки халыҡтарының үҫеш проблемалары, уларҙың тарихы, киләсәге тураһында тикшереүҙәр алып бара торған ижтимағи нигеҙҙә булһа ла академия булдырыу тураһында һүҙ күтәрелде һәм уның нигеҙ таштары ошо съезда һалынды. Дүртенсеһе - төрки халыҡтарының берләшеүе йәәллә ҡайҙа алыҫ китмәй, эргәбеҙҙә ятҡан Арҡайымды ғына алып ҡарайыҡ. Тәғәрмәс уйлап табылған, металл эшкәртеү, ҡорал эшләү серҙәре асылған, оҫтаханалар тәҙелгән. Хәрби сәнғәт тә юғары кимәлдә торған. Ләкин икенсе халыҡтарҙың ерен баҫып алып, уларҙы яулар өсөн һинең хәрби сәнәғәтең, шул уҡ ваҡытта ҡоралың камилыраҡ булырға ғына түгел, интеллектуаль кимәлең дә юғарыраҡ булырға тейеш. Көнбайышта әле цивилизация бик түбән булған ваҡытта Көнсығышта цивилизация юғары булған, астрономия, математика, медицина, архитектура өлкәһендә шундай иҫ китмәле асыштар яһалған. Йәки Дағстандың Дербентын ғына алайыҡ. Уның 40 километрға һуҙылған стенаһы бынан ике мең йыл элек ҡоролған. Минеңсә, ошо ҡаҙаныштарыбыҙҙы, цивилизация кимәлебеҙҙе күрһәтә белеү етешмәй беҙгә.

## Күңел яҡынлығына тел кәртә түгел

Бөтөн төрки халыҡтары өсөн Тәңре тигән төшөнсә бар. Ул Исламға тиклем үк күп халыҡтарға таралған һәм уларҙы берләштереп торған. Фольминеңсә, был яңылыш фекер. Беҙ, тәү сиратта, бер-беребеҙҙе һаҡлау юлында торорға тейешбеҙ. Мәҫәлән, бер нисә йыл элек Ҡытайҙа меңләп уйғыр студентын атып үлтерҙеләр. Шул ваҡытта бер генә ил дә шуны БМО алдында күтәреп сыҡманы, Ҡытайға һәм башҡа илдәргә мөрәжәғәт ебәрмәне, беҙ ҙә үҙебеҙҙең мөнәсәбәтебеҙҙе белдермәнек, ситтән күҙәтеүсе ролен генә үтәнек. Ә бит быға оҡшаш хәлдәр, мәҫәлән, Балҡан илдәрендә, бөгөн дә булып тора. Был бигерәк тә һан буйынса күп булмаған халыҡтарға ҡағыла һәм резолюцияның бер пункты итеп индерелде.

Үҙем өсөн был сәфәрҙә асыш һаным: сараға әллә ҡасан үлеп бөткән тип иҫәпләнгән ҡарнундарҙан 4 кеше килгән. Ошо халыҡтың яртыһы - Тажикстанда, яртыһы Үзбәкстанда йәшәй. Әлбиттә, был илдәрҙең үҙ дәүләт телдәре бар, әммә ҡарнундар, телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн үҙара аралашабыҙ, тиҙәр. Элек күрмәгән, танышмаған төрлө милләттәрҙең вәкилдәре - Молдова ғағауыҙдары, Төньяҡ Кавказдан ҡараимдар, нуғайҙар, балҡарҙар менән осрашырға тура килде. Башҡа ресҡорт халҡы менән шул тиклем ҡыҙыҡһына, беҙҙең тапшырыуҙарҙы ҡарап баралар, ҡулдарына килеп эләккән журналдарҙы уҡыйҙар, Интернет селтәре аша матбуғат баҫмалары менән танышалар икән. Салауат Хәмиҙуллиндың "Тарихи мөхит" тапшырыуы тураһында иҫтәре китеп һөйләйҙәр. Тапшырыуҙарҙы яҙҙырып алып, бигерәк тә үҙебеҙгә ҡағылышлы ерҙәрен мәктәптәргә таратып бирәбеҙ, тиҙәр.

Үҙ сығышымда дөйөм төрки донъяһына күрһәтерлек телевидение булдырыу тураһында сығыш яһаным һәм ул резолюцияға ла инде. Төрки халыҡтарының яҙмышын, тарихын, бөгөнгөһөн сағылдырған журнал, гәзит нәшер итеүҙе ойоштороу тураһындағы икенсе тәҡдимем дә хуплау тапты.

Нуғайҙар депортацияланған халыҡтарҙы аҡлау тураһындағы мәсьәләне күтәреп сыҡты. Был категория һаман тулыһынса аҡланмаған, документтар ерөнә еткереп эшләнмәгән һәм ҡабул ителгән закондар ҙа тейешле кимәлдә үтәлмәй. бирҙеләр, ә бинаны республика үҙ иҫәбенә төҙөргә бурыслы. Әлбиттә, минең бер ниндәй ҙә вәкәләтем юҡ, шулай ҙа ошо хаҡтағы документҡа ҡул ҡуйып ҡайттым.

## Хыялдарға кәртә юҡ…

Тағы бер мәсьәлә - Туранда йәки Төркөстанда төрки халыҡтарының ҙур музейын, конгресс-зал булдырыу. Шунда киләсәктә осрашыуҙар үткәреү мәсьәләһе күтәрелде. Әлбиттә, уларҙы хәл итеү өсөн ниндәйҙер иҡтисади нигеҙ булырға, был мәсьәләләр буйынса төрлө төрки дәүләттәре етәкселәре лә йыйылып һөйләшергә, үҙҙәренең өлөшөн индерергә тейеш, тип уйлайым. Әлбиттә, мин үҙебеҙҙең Арҡайым нигеҙендә музей, конгресс-зал эшләү бигерәк һәйбәт булыр ине, тип хыялланып ултырҙым инде. Сөнки тикшеренеүсе С. П. Толстов тарафынан Арҡайымдың (Боронғо Туран) төрки халыҡтарының йәшәү үҙәге булыуы фәнни раҫланған. Арҡайым атамаһы - ул шартлы рәүештә генә бирелгән. Шул уҡ ваҡытта беҙгә Арҡайым тип атап йөрөгән ҡаласыҡтың исемен табырға кәрәк. Юҡһа, асыш яһағандан һуң уны арийҙарҙың төйәге булған, тип раҫланылар һәм шул юҫыҡта раҫлауҙарҙы дауам итәләр, фекер тараталар. Минеңсә, бында бер ниндәй арийҙар ҙа булмаған. Был - ата-бабаларыбыҙҙың, ҡанбабаларыбыҙҙың тыуған ере. Унан баш тартырға тейеш түгелбеҙ. Киреһенсә, тарихсыларыбыҙ, археологта-

***Арҡайым атамаһы - ул шартлы рәүештә генә бирелгән. Шул уҡ ваҡытта беҙгә Арҡайым тип атап йөрөгән ҡаласыҡтың исемен табырға кәрәк. Юҡһа, асыш яһағандан һуң уны арийҙарҙың төйәге булған, тип раҫланылар һәм шул юҫыҡта раҫлауҙарҙы дауам итәләр, фекер тараталар. Минеңсә, бында бер ниндәй арийҙар ҙа булмаған. Был - ата-бабаларыбыҙҙың, ҡанбабаларыбыҙҙың тыуған ере. Унан баш тартырға тейеш түгелбеҙ. Киреһенсә, тарихсыларыбыҙ, археологтарыбыҙ шул тамырҙарҙы эҙләп табып, бөгөнгө башҡорттарҙың заманында шунда йәшәгән халыҡтан сыҡҡанын раҫларға тейеш, тип уйлайым.***

***✓ Рәсәй милләттәре тураһында һүҙ араһында ғына бер-ике һөйләм менән телгә алып китеү - ул тарихты дөрөҫ күрһәтмәү, тигән һүҙ. Шуға күрә, бәләкәй сағынан уҡ балаларыбыҙҙа милли аң тәрбиәләргә тейешбеҙ.***

рыбыҙ шул тамырҙарҙы эҙләп табып, бөгөнгө башҡорттарҙың заманында шунда йәшәгән халыҡтан сыҡҡанын раҫларға тейеш, тип уйлайым. Әммә шул фекергә беҙ нисектер битарафбыҙ. Күп халыҡтар башҡортҡа ҡарағанда һуңыраҡ формалашҡан. Тарихсылар башҡорттарҙы был ерҙәргә Алтайҙан килгән, тип раҫлай. Заманында хатта ошо фекерҙе яҡлаусы Кузеев менән дә бәхәскә ингәйнем. "Беҙ бит Алтайҙа үҙебеҙҙең күҙаллауҙарыбыҙҙы раҫлаусы төрлө ат кәрәк-яраҡтары, башҡа матди дәлилдәр табып алып ҡайттыҡ", - тигәйне ул миңә. "Һеҙ ҡалмыҡ, Әстерхан яҡтарына сығып, ҡаҙыныу эштәре алып барһағыҙ, дәлилдәрҙе унан да табып алып ҡайтырһығыҙ", - тинем. Сөнки башҡорт халҡының бер өлөшө күсмә тормошта йәшәгән. Бигерәк тә Көньяҡ Уралда йәшәүселәр малдарын ҡайҙа үлән мул, шунда йөрөткән, ә

## Беҙ үгәй бала түгел!

Ни өсөндөр "төрки донъя" тигән һүҙбәйләнеш Рәсәйҙә хәүеф тыуҙыра. Ә бит шул уҡ ваҡытта славян донъяһы, рус маршы кеүек саралар үтеп тора. Беҙҙә милли проблемаларҙан ниндәйҙер ҡурҡыу бар һәм был "Ислам экстремизмы", "төрки халыҡтарының экстремизмы" тигән һүҙбәйләнештәрҙе таратыуға этәргес булды. Шул уҡ ваҡытта рус шовинизмы, рус фашизмы һүҙбәйләнештә генә түгел, тормошта аныҡ рәүештә осрап тора. Милли проблемаларҙы законлы рәүештә хәл итә белмәүҙән килеп тыуалыр бындай мөнәсәбәт. Мәҫәлән, төрлө ҡалаларҙың етәкселәре рус маршын үткәрергә рөхсәт итә, ә мосолмандар нимәлер үткәрергә планлаштырһа - төрлө сәбәп табыла. "Башҡорт маршы" тип сығайыҡ, бер квартал да үтеп өлгөрмәйәсәкбеҙ, алып мөмкин. Шуға күрә уларҙы ваҡытында күреп, ваҡытында хәл итергә өйрәнергә ваҡыт. Бөгөн милли мәсьәләләргә ҡағылышлы закондарҙың етешһеҙлектәре бик күп. Уларҙы тикшереп, камиллаштырырға, төҙәтеүҙәр индереүҙе тәҡдим итергә тейешбеҙ. Рәсәйҙә милли республикаларҙың тормошон, уның мәҙәниәтен, тарихын, яҙмышын күрһәтә торған канал да, баҫма матбуғат та юҡ. Федераль каналдарҙы йәки матбуғатты алып ҡараһаҡ, уларҙа тик кире яҡтар ғына күрһәтелә. Шул уҡ ваҡытта беҙ беренсе ун иң алдынғы, дотацияһыҙ төбәктәр иҫәбендәбеҙ. Шуға күрә, киреһенсә, беҙҙең уңыштарҙы башҡаларға күрһәтеү, таратыу яғын хәстәрләргә кәрәк. Беҙ бер ваҡытта ла дотацион республика булғаныбыҙ юҡ. Тимәк, әгәр беҙҙең иҡтисад шундай кимәлдә икән, халыҡтың тормош кимәле лә шул кимәлдә булырға тейеш. Ә беҙҙә кире-сек йәшәргә, нисек эшләргә, нисек уйларға тип өйрәтеү түгел, ә ошо халыҡтарға ярҙам итеү, уларҙың проблемаларын хәл итеү юлдарын эҙләү, уларҙы ҡыҫырыҡламау. Коммунизм һымаҡ инде. Дөрөҫөн әйткәндә, коммунизмдың төп принциптары, әгәр төрлөсә боҙолмаған булһа, улар Ҡөрьәндә һәм Тәүратта һалынған шул уҡ принциптар: азатлыҡ, тиңлек. Юҡҡа ғына, бөтөн яҡшы нәмә - ул онотолған иҫке нәмә, тимәйҙәр. Онотоп, ер менән тигеҙләргә тырышһыҡ та, хәҙер шул принциптарҙы ҡабаттан тергеҙергә кәрәк.

## Ватансылыҡ тәрбиәләйек!

Һуңғы ваҡытта Рәсәй тарихы православие тарихына әйләнеп бара. Ә бит илдә йәшәүсе халыҡтарҙың һәм милләттәрҙең һәр ҡайһыһының Рәсәй тарихына индергән өлөшө бик ҙур, әһәмиәтле, улар беҙ үҙебеҙҙең исемдәрҙе һаҡлап киләбеҙ әле. Икенсе яҡтан ҡарағанда, 10 мең халыҡҡа нисә юғары белемле кеше тура килеүенән сығып, халыҡтың интеллектуаль кимәле билдәләнә. Был йәһәттән һуңғы ваҡытта яҡуттар бик ҙур аҙым яһаны, уларҙа ошо күрһәткес башҡорттарға һәм татарҙарға ҡарағанда ике тапҡырға юғарыраҡ. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда бөгөн нефть, авиация университеттарында, хатта БДУ-ла ла башҡорт факультетынан башҡа башҡорт төркөмдәре булдыра алмайбыҙ. Бер ваҡыт юристарҙа башланып тора ине ул, бөгөн ул да юҡ. Ошо йүнәлештә яҡуттар бик әүҙем эшләй. Санкт-Петербургтың уҡыу йорттарында үҙҙәренең төркөмдәрен булдыралар. Уларға маҡсатлы йүнәлтмә буйынса ебәрәләр. Һәм иң мөһиме - уҡып сыҡҡан балалар кире Сахаға ҡайта. Был бик дөрөҫ аҙым. Беҙҙең бала-

# БЕР ҠАНАТЫ – АЗИЯЛА,

## Европала ҡағына бит...

инде һалҡындар төшә башлағас, әйләнеп ҡайтыр булған. Сөнки ышыҡланыр урын, урман-тауҙар бар. Шул уҡ ваҡытта уның икенсе өлөшө ултыраҡ тормош алып барған. Ултыраҡ тормош алып бармаған бер генә дәүләт тә икенсе дәүләт менән бәйләнешкә кермәй. Ә башҡорт халҡы рустар менән бер рәттән Рәсәй федерацияһына нигеҙ һалыусы булып тора.

Рәсәй составына үҙ ирке менән ингәндән һуң башҡорт елкәһенә Рәсәй сиктәрен һаҡлау кеүек ҙур бурыс йөкмәтелгән. Беренсе Бөйөк Ватан һуғышында 29 башҡорт атлы полкының Парижға инеүе үҙе генә ни тора! Был бит халҡыбыҙҙың хәрби ҡеүәте хаҡында ла һөйләй. Француз, немец рассамдарының шул ваҡытта төшөргән картиналарында башҡорт яугирының һынландырылыуы ла юҡҡа түгел. Беҙгә, башҡорттарға, ошоларҙы күрһәтә белергә, ошолар нигеҙендә донъя кимәленә сығырға кәрәк.

Съезд ултырышы барған мәлдә лә өҫтәлдә Ҡаҙағстандың, Төркиәнең, Башҡортостандың флагтары тора ине, мин Башҡортостандыҡын ике флаг араһына уртаға күсереп ҡуйҙым. Һуңынан егеттәр: "Фәнил Сәйетович, флагығыҙҙы шундай итеп ҡуйҙығыҙ, әйтерһең дә Башҡортостан - Ер кендеге", - тиҙәр. "Эйе, Арҡайым бит беҙҙеке, тимәк, Башҡортостан - Ер кендеге, беҙ Троянан да олораҡбыҙ", - тинем. Аллаһы Тәғәлә үҙе шулай ҡушҡан икән, беҙ форвард булырға, алда барырға тейешбеҙ.

барып ябасаҡтар. Миненсә, халыҡтарға бер төрлө ҡараш булырға тейеш. Уларҙы ҡанына, принциптарына, диненә ҡарап бүлергә түгел, ә мәнфәғәттәрен, телен, динен һаҡларға кәрәк. Шуға күрә мин бөгөн Украинала күҙәтелгән күренештәр Рәсәй өсөн хәүефле сигнал, тип уйлайым. Әгәр ҙә беҙ федератив принциптарҙы, телдәрҙең, мәҙәниәттәрҙең тигеҙлеген танымайбыҙ, уларҙың мәнфәғәтен бер тигеҙ тормошҡа ашырмайбыҙ икән,



***Рәсәйҙә милли республикаларҙың тормошон, уның мәҙәниәтен, тарихын, яҙмышын күрһәтә торған канал да, баҫма матбуғат та юҡ. Федераль каналдарҙы йәки матбуғатты алып ҡараһаҡ, уларҙа тик кире яҡтар ғына күрһәтелә. Шул уҡ ваҡытта беҙ беренсе ун иң алдынғы, дотацияһыҙ төбәктәр иҫәбендәбеҙ. Шуға күрә, киреһенсә, беҙҙең уңыштарҙы башҡаларға күрһәтеү, таратыу яғын хәстәрләргә кәрәк. Беҙ бер ваҡытта ла дотацион республика булғаныбыҙ юҡ. Тимәк, әгәр беҙҙең иҡтисад шундай кимәлдә икән, халыҡтың тормош кимәле лә шул кимәлдә булырға тейеш. Ә беҙҙә киреһенсә килеп сыға. Ирекһеҙҙән, ҡайһы бер төбәктәрҙе күреп, беҙҙә халыҡ эшләй, уларҙа беҙҙә эшләгән халыҡ иҫәбенә йәшәйҙәр, тип уйлап ҡуяһың.***

тимәк, шундай уҡ ҡаршылыҡтарҙы тыуҙырабыҙ. Шеш бит бер көндә генә барлыҡҡа килмәй, ул йыйылып-йыйылып, тулышҡас ҡына һытыла. Бөгөн Рәсәйҙә Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүсе министрлыҡ юҡ, Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙа милли сығыш иҫәпкә алынмай, башҡорт халҡының статусы бөгөн үҙенең тыуған республикаһында рус һәм татар статустарынан түбәнерәк, тейешенсә кадрҙар сәйәсәте юҡ икән, ошо етешһеҙлектәр бергә йыйылып, ҙур проблемалар тыуҙырыуы, ауыр эҙемтәләргә килтереүе һенсә килеп сыға. Ирекһеҙҙән, ҡайһы бер төбәктәрҙе күреп, беҙҙә халыҡ эшләй, уларҙа беҙҙә эшләгән халыҡ иҫәбенә йәшәйҙәр, тип уйлап ҡуяһың.

Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә социаль тигеҙлек программаһын булдырыу кәрәк. Мин съезда ла был хаҡта әйтеп киттем. Тигеҙһеҙлек - күп етешһеҙлектәрҙең сәбәбе булып тора. Шулай уҡ интернационализмды үҫтерергә, барлыҡ проблемаларҙы ошо принциптан сығып хәл итергә кәрәк. Ә интернационализм - ул дәүләттең эшенә тығылыу, ниһәр ҡайһыһы шанлы, ҡанлы, данлы тарихҡа эйә. Бөгөнгөләре лә тарих биттәренә инмәҫлек түгел. Рәсәй милләттәре тураһында һүҙ араһында ғына бер-ике һөйләм менән телгә алып китеү - ул тарихты дөрөҫ күрһәтмәү, тигән һүҙ. Шуға күрә, бәләкәй сағынан уҡ балаларыбыҙҙа милли аң тәрбиәләргә тейешбеҙ. Улар үҙҙәренең телен, тарихын, йолаларын, аралашыу мөмкинлектәрен белергә, уларҙан оялмаҫҡа тейеш. Юҡһа, бына сыуаштар, яҡуттар Иван да Никита тип йөрөтә үҙҙәрен. Был йәһәттән, Аллаға шөкөр, лар ҙа һуңғы йылдарҙа Мәскәү, Санкт-Петербург уҡыу йорттарына күпләп уҡырға инә, тик күптәре республикаға кире ҡайтмай. Ҡайтҡандары ла бик аҙ. Тимәк, был йүнәлештә эшләп еткермәйбеҙ, балаларҙа ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләмәйбеҙ. Бөгөн хатта юғары уҡыу йорттарынан сит илдәргә стажировкаға ебәрелеүселәрҙең дә бик аҙҙары ғына әйләнеп ҡайта. Икенсенән, дәүләт үҙенең киләсәге хаҡында уйлай икән, уның интеллектуаль кимәлен үҫтереү һәм һаҡлау өҫтөндә лә эшләргә тейеш. Интеллектуаль кимәлде үҫтереү өсөн зыялыларҙың матди хәлен яҡшыртырға кәрәк. Съезда ла интеллигенцияның үҫеше тураһында һүҙ күп булды. Сөнки интеллигенцияның үҫеше, уның кимәле - ул беҙҙең цивилизацияның кимәлен билдәләй торған күрһәткестәрҙең береһе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Азия менән Европаны бүлеп ятҡан Башҡортостан - бөтөн донъяла ике цивилизация уртаһында булған берҙән-бер дәүләт (Төркиәнең ниндәйҙер өлөшө генә Европаға сығыуҙы иҫәпкә алмағанда) тиергә мөмкин. Уның бер ҡанаты Европа яғында ҡағынһа, икенсеһе тарихи төрки донъяһында елпенә. Ә ҡошҡа юғары осош өсөн ике ҡанатының да тигеҙ ҡағыуы кәрәк. Шуның өсөн дә Башҡортостанға Азия менән Европаның, йәғни Көнсығыш менән Көнбайыштың барлыҡ ыңғай үҫешен алып, ҡулланып, иң алдынғы цивилизациялар рәтенә сығырға Аллаһы Тәғәлә үҙе бойорған.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

***✓ Апаһының ир етеп барған улдарын бәләкәй балаларҙай аймап-аймап һөйгәнен, ҡыҫтап-ҡыҫтап ашатҡанын сәйерһенеп тә, бер аҙ екһенә биреп тә күҙәтте Асия. "Шулай ярата микән апаһы балаларын? Уны ла шулай уҡ ярата микән?.."***




Баш ҡалала танышты Тәлғәт менән дә. "Пятачок"та йырлап-көлөп, йәштәрҙең уртаһында йөрөгән егет ни ғилләмен уйындарҙа ҡатнашмаған, шаярмаған, хатта артыҡ һөйләшеп тә бармаған был ҡырыҫ ҡарашлы сибәркәйҙе һайлағандыр. Ана шул һалҡын матур йөҙҙә йылмайыу ишараты күреү, төйөлөп торған нәҙекәй ҡаштарҙы бер аҙ булһа ла яҙҙырып ебәреү, ынйы тештәрҙе көн нурында ялтыратыу өсөн аҙ тырышлығын һалманы Тәлғәт. Һандуғас булып һайраны, ыласын булып кәйелде янында, ал тигәндә алын, гөл тигәндә гөлөн табып алып килде. Ҡарһылыуының йәнен иретеүгә бар йөрәк ҡайнарлығын һалды ғашиҡ йән.

Асияға ла был айыуҙай кәүҙәле, асыҡ күңелле егет оҡшай, бик оҡшай ине. Тик ул "егет менән дуҫлашһаң, уға кейәүгә сығырға кәрәк, сыҡһаң - балалар" тигән уйҙан ҡаса алмай һәм шунлыҡтан үҙенән бер генә йылы ҡараш, ым-ишара көтөп зарыҡҡан егетте нишләтергә лә белмәй. Йылдан ашыу ҡыҙҙың йөрәген аса алмаған егет бер көн килеп эште ҡабырғаһы менән ҡуймаһа, был хәл күпме дауам иткән булыр ине икән.

- Асия, мин һине аңлай алмайым, кәрәкме ул мин һиңә, әллә юҡмы? - тип һалды бер көн Тәлғәт, тын ғына етәкләшеп парк аллеяһынан атлағандарында.

- Нишләп... улай тиһең? - ҡыҙ һорауға һорау менән яуап бирҙе.

- Ҡыумайһың да, яҡын да ебәрмәйһең... Бер дурак кеүек йөрөйөм. Минән уже егеттәр көлә.

Ҡыҙ өндәшмәне. Ул бындай хәбәргә әҙер түгел ине. Ысынында ул бындай һөйләшеүгә бер ваҡытта ла әҙер булмаясаҡ.

- Йә, нимә тағы тындың? Кәрәкме мин һиңә, түгелме? "Юҡ" тиһәң, китәм... башҡаса борсомам, -Тәлғәт һүҙенән кире ҡайтмаҫын дәлилләргә теләгәндәй, туҡтап, ҡыҙҙың ҡаршыһына боролоп баҫты. - Әйт!

"Нимә әйтергә һуң?.. Юҡ! Ул Тәлғәтте юғалтырға теләмәй! Яратамы? Белмәй... Нисек һуң ул яратыу?.. Тәлғәт уға кәрәк, уға һыйынғыһы, арҡаланғыһы, иркәләнгеһе килә. Ул бит беренсе тапҡыр үҙен ҡәҙерле итеп тойҙо уның менән..."

- Эй...йе, - тауышы ишетелер-ишетелмәҫ сыҡты Асияның.

- Нимә "эйе"?

- Кәрәкһең... миңә.

Дуҫлашҡандарынан алып тәүге иң йылы һәм иң иркә һүҙҙәрҙе ишетте егет. Гүйә, "кәрәкһең" тип кенә түгел, ә "Яратам! Һөйәм! Һинһеҙ йәшәй алмайым!" тип ҡысҡырҙы. Шатлығынан һөйгәнен ҡосағына ҡармап алды:

- Улай булғас, өйләнешәбеҙ! Киләһе аҙнала!

- Нисек өйләнешәбеҙ? - Асия терт итеп ҡалды. -Кем әйтә?

- Мин әйтәм. Нимәгә һуҙырға? Бергә йәшәйбеҙ, бергә...

- Минең бала көткөм килмәй! Минең... Мин... - ҡапыл ярһып башланы ла, дауам итергә һүҙ тапманы.

Тәлғәт көлдө генә:

- Ярай, үҙем көтөрмөн. Ялҡау кәләш булаһың инде атыу миңә...

* * *

Күстәнәс алмағаны иҫенә төштө. Кәйефһеҙләнеп сығып китте бит иртәнсәк. Күстәнәс ҡайғыһы булдымы? Апайының ҡалҡыу булып әллә ҡайҙан күҙгә ташланып торған ҡыҙыл кирбес йорто ҡаршыһындағы магазинға һуғылмаҡсы булды. Инде лә кәштәләрҙәге тәм-томға күҙ йүгертте: нимә алырға? Асия лимон, ҡиммәтле кәнфиттәр үлсәткән арала ишек төбөндә тартҡылашҡан йәш әсә менән өс-дүрт йәштәрҙәге балаға иғтибар итте. Бала әсәһен тыңламай, магазиндан сыҡмай ҡырталаша, нимәлер алып биреүҙе талап итә, буғай, "ал..." тигән ялбарыулы һүҙҙәре генә аңлашыла. Әсәнең тамам тәҡәте ҡороно, ул сабыйын ҡулынан һелкетә тотоп алды ла елтерәтеп алып сыҡмаҡсы булды. Был күренешкә артыҡ иғтибар ҙа бирмәгәйне Асия, тик нишләптер, ни сәбәптәндер, үҙе лә көтмәгәндә быларға төбәп өндәште:

- Нимә алып бирмәйҙәр, ә-ә?

Ҡыҙыҡай шул һорауҙы ғына көткәндәй, әсәһенән аша башын һоноп, нәҙек тауыш менән сәрелдәп тә ебәрҙе:

- Бана-ан!

- Банан булғас банан. Бирегеҙ әле беҙгә банан!

Йәш ҡатын "Юҡ, юҡ!" тип ҡаршы тороп маташҡайны ла, бәләкәсе банан суғын ҡосаҡлап, күкрәгенә үк ҡыҫҡанды күргәс, уңайһыҙланыуҙан ни эшләргә белмәне:

- Уй, апай, ҡалай уңайһыҙ булды. Бынауыныһы мыжып... Рәхмәт, апай, ҡана аҡсаһын...

- Ҡуй! Юҡ менән булма, - Асия уларға ҡул ғына һелтәп, тышҡа сыҡты. Ул арала сабый бәләкәс кенә нәҙек бармаҡтары менән банан тышын һыҙырып маташа ине инде.

Айһылыу апаһында һәр ваҡыттағыса күңелле, шау-шыулы, өйө йылы, һыйлы. Тыштан уҡ танауҙы яңы бешкән ит еҫе ҡытыҡлай. Ысынлап та, әсәһе кеүек тәбәнәк йоморо апаһы ашҡа һалма ҡырҡа, ҡыҙы ҡоймаҡ ҡоя. Игеҙәк кинйәләре тәрилкәгә төшкән генә ҡоймаҡтарҙы эләктереп тора, тик уларҙы тыйған кеше юҡ.

Асия өҫтәл артына ҡунаҡлап, быларҙың мәшәҡәттәрен күҙәтә. Уға эш бирмәнеләр, ултырып ҡына торорға ҡуштылар. Хәл-әхүәл һорашҡан арала ла малайҙарҙың ҡоймаҡ сәлдереүенә күҙ йомоп ҡала алмай, "Етәр һеҙгә!" тип бармаҡ янай, тегеләр уның әйткәненән бигерәк ҡаш төйөүенән шикләнеп, ситкә китә һала. Апаһы күрмәмешкә һалыша.

- Хәҙер, аш та өлгөрә инде, - Айһылыу стеналағы сәғәткә күтәрелеп ҡарап ала. - Балаҡайҙарымдың эстәре өҙөлөшөп килә микән...

- Сыҡҡандармы? - Иҫе китмәй генә һорай Асия, кемдәр хаҡында һүҙ барғанын белеп тора бит инде.

- Ултырҙыҡ, тип шылтыратҡайнылар. Оҙаҡлайҙар әле, юл насар мәл килеп.

- Көн булмағанда йөрөмәй торорҙар ине, кеше борсоп. Аҙна һайын, аҡса туҙҙырып, ҡатыраҡ әйтеп ебәрмәйһең инде, - Асия шулай апаһын шелтәләп алырға ла өлгөрә.

- Ҡалайтып, ҡайтмағыҙ, тип тораһың, асығышып ҡына йөрөгән балаларға. Ҡыҙҙар булһа, бер хәл, малайҙар үҙҙәрен үҙҙәре ҡарай аламы ни? - Айһылыуҙың студент улдарына һүҙ тейҙергеһе килмәй.

- Аҙыраҡ асыҡҡандан үлмәйҙәр инде, әпәүләп...

Айһылыуҙың һүҙ көрәштергеһе килмәй, хас әсәләре мәрхүмә инде, шунда уҡ икенсе хәбәргә күсә лә китә:

- Анау һинән алып ҡайтҡан гөл ней, хәтәр үҫте лә китте, бар күр әле.

Гөл үҫтерә алмай шул Асия. Ултыртҡаны һулый, һатып алған йә бүләк ителгәндәре ултыра-ултыра ла үлә. Теге юлы ла тыуған көнөнә коллегалары шау сәскә атып ултырған гөл биргәйнеләр, яҡтыла ғына тотто, һыу ҙа ҡойҙо, тик тегегә нимәлер килешмәне - бөршәйеп төштө. Сығарып ташларға тип ишек төбөнә ҡуйған ерҙән апаһы күреп, алып ҡайтып китте. Әле шул гөл, йүнһеҙ, күкрәп ултыра, тиген. Хикмәт инде.

Ҡарашы гөлдән тышҡа күсте Асияның. Ҡаршы яҡта бая магазинда күргән йәш ҡатын балаһын уйната.

- Яңы ғына ошо бала магазинда банан таптыра, әсәһе алмай ине...

Айһылыу килеп тәҙрәгә күҙ һалды ла:

- Ә-ә, ул ҡалайтып банан һатып алһын инде, саҡ көн күрә, - тип ҡуйҙы.

- Нишләп? Эскесегә оҡшамаған ине шикелле, - Асия тәҙрәгә тағы бер ҡарап алды ла пәрҙәне төшөрҙө.

- Үҙе эсмәһә ней, әсәһе эсә, әсәһенең абышҡаһы эсә, балаһы бәләкәй, эше юҡ, - Айһылыу шулай теҙә-теҙә аш бүлмәһенә ҡабаланды.

Ул арала шаулашып студенттар ҡайтып инде. Апаһының ир етеп барған улдарын бәләкәй балаларҙай аймап-аймап һөйгәнен, өҫтәл артында ҡыҫтап-ҡыҫтап ашатҡанын сәйерһенеп тә, хатта бер аҙ екһенә биреп тә күҙәтте Асия. "Шулай ярата микән апаһы балаларын? Ә уны? Уны ла шулай уҡ ярата микән?.."

Ултырып, иркенләп һөйләшергә форсат теймәһә лә, һеңлеһенең кәйефен һиҙгән Айһылыу, оҙата сыҡҡанда: "Кейәүҙе әбижәйт итмә", - тип уйынлы-ысынлы әйтеп ҡалды. "Һиҙҙе микән?.. Һиҙеләләр шул..."

* * *

Бер көн эштә компьютерындағы таблицаларға һибелгән һандарҙы сүпләп күҙе-башы тоноп ултырғанда, секретарь Әҡлимә килеп инде лә, башҡа өҫтәлдәрҙәге ҡыҙҙарға ишеттермәҫкә тырышып, ҡолағына эйелеп бышылданы:

- Асия Аҡназаровна, һеҙгә бер нәмә алып килгәйнем, һуңынан миңә инеп сығығыҙ әле. Үҙе мәғәнәле генә итеп ҡаштарын һикерткеләп сығып та китте.

"Нәмә" тигәне гәзит икән. Ҡатын гәзит битен улай-былай әйләндерҙе:

- Нимә бар бында?

Әҡлимә осло тырнаҡтар йәбештерелгән бармағын бер рекламаға төрттө:

- Бына быны яҡшылап уҡы.

Асия уҡып сыҡты. Тағы уҡыны. Тик бер ни ҙә аңламаны.

- Нимә һуң?

- Бәй-бәй, русса аңламай башланыңмы әллә? "Әсәлек һәм балалыҡ" йылына арналған яңы программа буйынса яһалма бәпес яһау быйылғы йылда бушлай була, тигән.

Асия бер килке һүҙһеҙ торҙо. Бер ҡыҙарҙы, бер буҙарҙы. Шулай ҙа ярһымаҫҡа тырышып, теш араһынан ҡыҫып сығарҙы:

- Причем тут... Кәрәк булһа, мин аҡсаға ла яһата алам.

- Уныһы шулай инде, но выход бит был идея, - Әҡлимә әхирәте үк булмаһа ла, яҡын уҡ аралашып йөрөгән коллегаһының күҙенә инеп барҙы. - Үҙеңә булмай икән, суррогат әсә табып яһатырға була. Ул бит барыбер һеҙҙең ген була, ирең менән һинеке инде, то есть.

- Уй, ҡуй әле, Әҡлимә, мин һине берәй етди нәмә әйтәлер тип киләм, булмаҫтай менән баш ҡатырып, отчет мәлендә...

- Буш түгел ул, Асиюш, уйла әле һин. Хәҙерге заманда бала табып биреүсе ҡатындар аҙ түгел тей ул, аҡсаға бөтә нәмә лә һатылған ваҡыт бит...

Әҡлимә ишектән сыҡҡансы эйәреп килеп, һөйләп ҡалды. Асияның һарыуы ҡайнап китһә лә, башында баяғы һүҙ тумыртҡа кеүек сүкеп барҙы: "Суррогат! Суррогат! Суррогат!"

* * *

Тәлғәт теге көнгө һөйләшеүҙән һуң ялын балыҡта үткәреп, күңеле күтәрелеп ҡайтҡас, көйлө генә йөрөй кеүек ине лә, киске тамаҡ ашағандан һуң, телевизор ҡарап ятты-ятты ла, ҡапылдан:

- Әйҙә, приюттан бер малай алайыҡ, - тимәһенме.

Битенә маска һылап ултырған ҡатыны уға көҙгө аша төбәлде. Ире уның аптыраған һораулы ҡарашын шулай уҡ көҙгө аша тотто.

- Ниңә аптырайһың? Ошолайтып тик ултырып үткәрәбеҙме ни ғүмерҙе?

Ҡатын иҫке китмәгәнгә һалышты:

- Тик ултырмайбыҙ бит, көнөтөнө эштәбеҙ. Ул баланы кем ҡарай?

Ирҙең тауышы ҡапыл ҡырҡыуланды:

- Һин! Кәрәк булһа - мин! Бер бала ҡарай алмаҫлыҡмы беҙ?..

Өндәшмәҫкә көс тапты үҙендә Асия. Ҡаршы һөйләшмәҫкә. Тәүге тапҡыр әсәһендә, апаһында күрә йөрөгән ҡылыҡты тотто. Шымып ҡалды. Сөнки белә - был мәсьәләлә ул көсһөҙ.

Юҡ, приюттан бала алырға теләмәй ул. Быға йәне-тәне менән ҡаршы. Сит баланы ғүмерҙә лә ярата ла, өйрәнә алмаясаҡ. Ошонда, уның өйөндә ниндәйҙер бала йыбырлап йөрөһөн әле!

Ашығып, эстән генә яуап эҙләне лә, үткәндә Әҡлимә әйткәнде иҫенә төшөрөп, шул "һалам"ға йәбеште:

- Бик теләгәсең, әйҙә, суррогат әсә эҙләйек. Улай булғанда, бала үҙебеҙҙең ҡандан була.

Тәлғәт ятҡан еренән килеп үк торҙо:

- Уныһы нисек була тағы?

- Ну-у, беҙҙән алынған орлоҡтар яһалма аталандырыла ла, суррогаттың ҡорһағына һалына - вот и все.

Хәҙер инде ире бер килке тынып ултырҙы. Башына һыйҙыра алманы, күрәһең, бындай яңылыҡты. Ахырҙа саҡ телгә килде:

- Улай законлымы һуң?

- Медицина рөхсәт итә бит һуң, ана, әртистәр ҙә таптыра, Киркоровтың шулай ике балаһы бар тип телевизорҙан бөтә илгә һөйләп торалар.

- Һе... - Тәлғәт бер ултырҙы, бер тороп бүлмә буйлап йөрөп китте. Унан ҡабаттан ҡатынының ҡашына килеп торҙо. - Үндай ҡатынды ҡайҙан алаһың һуң, Асия, кем улай кешегә бала табып бирә тиһең? Сит илдә генәлер ундай әкиәт?

Хәҙер инде Асияның әйткәненән кире сигенер хәле юҡ ине. Булмағанда ла, ирен тынысландырып торорға кәрәк. Шунлыҡтан, ул ҡәтғи һөйләште:

- Нишләп булмаһын... Эшһеҙ, аҡсаһыҙ ҡатындар менән донъя тулы. Түләүгә балаларын да һаталар ана.

Тәлғәт әйләнеп китеп тағы бер урап килде лә, ҡатынының алдына сүгәләп тороп, күҙҙәренә төбәлеп ялбарҙы:

- Улай булғас, тап һин шундайҙы, Асия, тап, йәме. Мин хаҡында тормам. Бармаҡ башындай бала өсөн ошо өйҙө лә бирергә риза...

Ҡатын иренең аҫтан өҫкә тилмереп баҡҡан ҡараштары тотҡонында, хәлдең ысынлап та үтә лә аяныс һәм ҡотолғоһоҙ икәнлеген аңлап, керпектәрен генә елпетеп, ризалығын белдерҙе. Ире уның аяҡтарын ҡосаҡлап, йоморо тубыҡтарына йөҙө менән ҡапланды. Ҡырҡҡа етеп барған ирҙең тау кеүек яурын-арҡалары ҡалтыранды. "Илаймы әллә? Улай тиһәң, йәштәре юҡ". Ирҙәрҙең күҙ йәшһеҙ генә илай алыуын белмәй ине Асия...

**(Дауамы бар).**

Лариса АБДУЛЛИНА

# САЛАУАТ, ТИП ЙЫРҘАР БАШЛАЙЫМ ДА,

## Салауат, тип сығам көрәшкә!



### Яҡты доғам минең - Салауат!

Иҫтәремдән һис тә сыҡҡаны юҡ -
Хәтеремдә минең, аңымда.
Йөрәгемдә сардар итеп хисем,
Ғәскәр итеп туплай ҡанымды.

Әйләнәм дә киләм Салауатҡа,
Тоҡандыра мине азатлыҡ!
Батырҙары булған илемдең, тип,
Иҫкә алыу бөгөн ғазапмы?

Һығындыра яҡты тәүәккәллек,
Көрәш сәмен һуҙа фарманы.
Ауазыңды эҙләп, Батыр,
Илдең
Ҡай еренә генә барманым.

"Салауат!" тип йырлы исемеңде
Доға итеп алам телемә!
Тәсбих әйтәһеңдер кеүек һаман
Именлектәр теләп иленә!

Таңдарым да минең - Салауат ул!
Ай-йондоҙло төнөм - Салауат!
Төштәремдең изге яугиры ла,
Ҡотло көнөм-өнөм - Салауат!

Салауат, тип йырҙар башлайым да,
Салауат, тип сығам көрәшкә!
Салауат, тип маҡсаттарға менәм,
Ауыҙлыҡлап алып һәр эште!

Иҫтәремдән һис тә сыҡҡаны юҡ-
Яҡты доғам минең - Салауат!
Һиңә ғашиҡ заман ҡыҙҙарынан,
Рухи ғәскәреңдең уйҙарына,
Батырҙарҙың ожмах туйҙарына
Барып етһен ине был аят!..
Салауат!

### Салауат шишмәһе

Был донъяның мөғжизәһе булып,
Боронғонан алып ағышын -
Шишмә аға Урал ҡосағында
Ергә һибеп яҡты һағышын.

Нисек кенә ул һаҡланған икән,
Нисек һаҡланған һуң исеме?..
Был сафлыҡтың асылында әллә
Халҡыбыҙҙың рухи көсөмө?..

Сылтыр-сылтыр килеп ниҙер көйләй -
Бүлешәме әллә шатлығын?
Төпкөлдәрҙән, эй, урғыла шишмә
Көрлөк һибеп, сыға атлығып.

Нисек уға юл һуң өҙөлмәгән
Тыйылғанда батыр исеме?
Урал ҡосағында шишмә йырлай -
Халҡыбыҙҙың һөйөү хисеме?..

Йәншишмәнең үҙе кеүек сихри -
Ул яҡтылыҡ һибә еренә.
Сабый ҡарашындай был шишмәлә
Быуаттарҙың йөҙө күренә.

Шишмә үҙе Салауатты күргән,
Һыуһындарын уның ҡандырған.
Урал һүҙен тотҡан батырыбыҙ
Васыятын бында ҡалдырған.

Шишмә тере!
Шишмә йылғаларҙы
Азат рухы менән һуғара.
Һәр бер милләттәштең йөрәгенә
Аҡбуҙатын илтеп туғара.

...Урал ҡосағында шишмә аға -
Салауаттың яҡты өмөтө!
Азатлыҡты данлар һәр тамсыға
Тоғро микән батыр өммәте?

### Милли тойғо

Әллә инде төпкә андан килә,
Әллә инде эстән, йөрәктән,
Әллә инде тамырҙарҙа ҡайнап,
Тупланғандай була беләктә?..

Ҡурай моңо ишетелеп ҡалһа,
Субырлап та тама күҙеңдән.
Ҡылҡумыҙҙан тарихтарға елә...
Ҡасып буламы ни үҙеңдән!

Тик бер хәбәр ишетелеп ҡалһын
Ошо милләт, халыҡ хаҡында -
Уйҙар яугир булып тупланалар,
Мең хеҙмәткә егеп аҡылды!

Тик бер һөйләм ишетелеп ҡалһын
Сит ерҙәрҙә тыуған телемдә,
Тоям Салауаттың, Вәлидиҙең
Баҫып торғанлығын эргәмдә!

Тынғы бирмәҫ моңло бер көй кеүек,
Йырлы доға кеүек асманда,
Ошо тойғо көндө биләп алһа,
Заман сире беҙҙән ҡасҡандай!

Йәшәй алмайым, ти, ул яуҙарһыҙ,
Йәшәй алмайым, ти, тоҡтонда!
Һиҙәһенме, йөрәгеңде тынла,
Ғәләм дөрләтерлек ут унда!

Уралында - арҡа-атайсалы,
Күктәр үҙе биргән паспортты!
Милли тойғо рухың яндырамы,
Егерме беренсенең башҡорто?..

### Илемде эҙләйем...

Төрөк халҡы анлай микән
Үҙҙәренең бәхетен?..
Улар тойоп йәшәй илдә
Илдәренең рәхәтен.

Телдәре лә ирекле ҡош
Милләте асманында.
Үҙ исемен яҙа халыҡ
Еңеүсе таҫмаһында!

Йырламайҙар кеше йырын,
Ят таҡмаҡҡа баҫмайҙар!
Һәр бер ҡапҡа шаҡыусыға
Ишекте лә асмайҙар.
Ҡаҙандар ҙа аҫмайҙар...

Эй, рәхәттер инде илең
Булмаған йөҙ ямаулы.
Мәркәзеңдә һәр бер һүҙең
Булмаған һис ҡамаулы.

Эй, рәхәттер - "Ил!" тигәндә,
Ирәйеп китә алһаң,
Ете быуын варисыңа
Ер бүләк итә алһаң...

Аңламаҫ мине төрөктәр
Булһаҡ та беҙ төркиҙәр.
Әле булһа Ватанымда
Ҡолойҙарҙан өркөйҙәр.

Әле булһа бер аяҡҡа
Тыпырлаған булабыҙ.
Үҙебеҙҙән ары китмәй
Ил-ер тигән булабыҙ.

Һуҡыр ҙа түгелмен кеүек -
Танымайым илемде!
Һаңғырау ҙа түгелмен,
Тик
Ишетмәйем телемде!

Илдә илемде эҙләйем
Ҡабыҙып утлы сыраҡ.
Алдар батыр мәртәбәһе,
Ҡаранайҙың тоғролоғо,
Салауаттың сардарлығы
Әлегә йыраҡ, йыраҡ...
Тик һүнә күрмә, сыраҡ!

### Алдар батыр

Тып-тын ялан...
Бөтә яугирҙарҙың
Ҡараштары - ике батырҙа.
Аһ, кемеһе еңер?
Әле бере...
Икенсеһе ергә ятырҙай.

Яраланған бүре ярһыуылай,
Ғәййәрлеге әллә ҡайнаны,
Әллә Күктәр ҡыйыулығы өсөн
Еңеүсе тип уны һайланы!

Черкес тәнен аша үткән ҡылыс
Азов диуарҙарын емерҙе.
Рәсәй сығыр диңгеҙ майҙанына,
Эҫе саҡта һуғып тимерҙе.

Ике яугирҙан да ҡандар тама,
Ергә ауҙы әммә береһе.
Айбарлығың менән, Алдар батыр,
Һин әле лә илдә тереһең!

Шау-шыу килә ялан...
Төрөк башы
Ышанмай ҙа тора был хәлгә.
Иң көслөһө тигән черкес ҡаны
Кем алдында бөгөн еңелгән?..

Кем һуң унда батырҙан да батыр,
Яраланған килеш ил яҡлай?
Башҡорттарҙың аҫыл ир-егете
Биргән антын ҡанда ныҡ һаҡлай!

Һуңғы һулышҡаса башҡорт тоғро:
Уның юлы тура һәм аҡтан.
Тарих белмәй хатта бер башҡортто
Тамаҡ өсөн генә ил һатҡан!

Рәсәй белмәй былдай батырлыҡты!
Йә, әйтегеҙ, тағы бер исем!
Кемдәр шулай яуға инә ала
Һис аямай йәнен, рух көсөн?!

...Йылҡылары өйөр-өйөр уның,
Мәртәбәле башҡорт тарханы!
Ауылдарҙы тупраҡ итмәҫ өсөн
Етер ине тик бер фарманы...

Ҡалҡан булыр мәлдә бар халҡына,
Салауатты яҡлар саҡтарҙа,
Кемдәр генә юлын борҙо икән
Минҙәләлә торған ҡаҡ дарға?

Мең бәләле таш зинданлы ҡала,
Бар икән дә һинең үҙ йәнең.
Һин бит үҙең үтеп барған саҡта
Илай-илай тарих һөйләнең.

Уйһыуҙарға бында күҙ-йәш тулған,
Йылға үҙәненән ҡан аҡҡан.
"Беҙ ғәйепле түгел!" тигән кеүек
Һыҡтап ҡаршылайҙар йыраҡтан...

Һеҙ ғәйепһеҙ...
Һеҙгә һорау ҙа юҡ...
Бында әжәл үҙе һаташҡан.
Ватанына тоғро Алдар йәне
Батыр булып Күккә олғашҡан!

Нимә һуң был?
Тоғролоҡҡа ниңә
Был ил ҡуя белмәй баһаһын?..
Милләт асманында яра һыҙлай,
Ниҙәр менән генә баҫаһын?..

Табаҡ-табаҡ һүҙҙәр теҙҙем дә ул,
Һағышымды тәрән батырҙым...
Тәсбих әйттем ҡиблаларға ҡарап:
Рәнйемәһен йәне батырҙың...
Алдар батыр!

### Атҡа менһен әле был халыҡ!

Ат йәнле был башҡорт, тигән даны
Алыҫтарҙан киткән алыҫҡа!
...Бөгөн генә атһыҙ ҡалып бара
Ах, ошо һүҙ тейҙе намыҫҡа.

Ат үрсетмәҫ халыҡ түгел дә беҙ,
Арыған шул башҡорт аттары.
Яуҙар һайын ҡырылғандар ғына:
Күккә ашҡан йылҡы аһтары.

Дәүер һайын халҡы менән бергә
Оло һынау тотто был аттар.
Тамға һуғылғанға йөктән ауҙы,
Тонсоҡтолар ыуҙан юртаҡтар.

Башһыҙ һыбайлылар булмайыҡ беҙ,
Атҡа менһен әле был халыҡ!
Былар мине йүгәнләне тиеп,
Ҡарап торһон Ваҡыт таң ҡалып.

Ат тояғы тауыштары килһә,
Машинаның үткән юлында,
Тимәк, заман менән боронғолоҡ
Ышаныслы дәүер ҡулында.

Тимәк, әле дөрөҫ юлда саба
Мәңгелеккә табан Кешелек!
Аҡбуҙаттар һаҡлап тора илде
Төшмәҫ элек бәлә ишелеп.

Ат тояғы даға эҙе һалып
Үтә икән тыуған ереңдән,
Килгән афәттәр ҙә кире китер,
Бәрәкәттәр ҡайтыр киренән.

Ат йәнле был башҡорт, тигән даны
Киткәндә лә бер мәл сайҡалып,
Атта сабып Уңыш үҙе килә:
Атҡа менһен әле был халыҡ!

Атҡа менһен әле милләтебеҙ!
Йүгәндәрен алһын ҡулына!
Асылыҡүлдән йылҡылары сыҡһын,
Толпарҙары сыҡһын юлына!

### Башҡорт теле

Һин боронғо яугир, башҡорт теле,
Еңеп сыҡтың һәр бер алыштан!
Сыңйыр сыңы, ҡылыс тауыштары
Ишетелә алыҫ-алыҫтан.

Салауат та һинең кеүек булған,
Һөргөнлә лә үткән ғүмере.
Ауылдарҙа һине һаҡлағандар,
Көлгә күмгән кеүек күмерҙе.

Йырауҫылар һиңә ҡалҡан булған.
Ҡырҡҡанда ла телен сәсәндең,
Һуңғы һүҙен әйтеп киткән улар,
Түбән төшөрмәгән бәсеңде.

Һин дәүләттең именлеге - телем,
Һалдат кеүек һакта бөгөн дә!
Халҡың киләсәген йөкмәп алдың,
Һин күтәрҙең намыҫ йөгөн дә!

Башҡорт теле!
Һин сабыйым кеүек ғәзиз!
Ҡараштарың беҙгә төбәлгән.
Әйтсе, ҡайһы әкиәттә сафлыҡ
Яһилдарҙың барын еңәлгән?..

Әйтсе, телем,
Һин бит тере ауаз,
Бармы һине һаҡлар заттарың?
Хыянатҡа, беләм, яҙаң ҡаты...
Тоғроларҙың ҙурла анттарын!

ИНТЕРНЕТТАН



# ВЕЛОСИПЕД...

## иң яҡшы транспорт

■ Клемсон университеты ғалимдары билдәләүенсә, хәрәкәт итеү төрө булараҡ велосипед кешегә үҙен бәхетле тойорға мөмкинлек тә бирә. Ғалимдар бәхет, ауыртыу, стресс, күңелһеҙләнеү кеүек тойғоларҙың ниндәй транспорт төрөндә йөрөүеңә ҡарап үҙгәрә алыуын раҫлаған. Тикшереүҙең авторы Эрик Моррис әйтеүенсә, велосипедта йөрөгәндә кәйеф күтәрелә, был кешеләрҙең сәләмәтлегенә лә ыңғайлы ҡараған. Тикшереүҙең авторы Эрик Моррис әйтеүенсә, велосипедта йөрөгәндә кәйеф күтәрелә, был кешеләрҙең сәләмәтлегенә лә ыңғайлы булыуҙы hәм улар тиҫтерҙәренә ҡарағанда күпкә йәшерәк күренә.

■ Бер тапҡыр ғына ҡояшта ныҡ итеп яныу ҙа яман шеш хәүефен 80 процентҡа арттыра. Браун университеты ғалимдары билдәләүенсә, йәш саҡта йыш ҡояшта янған кешеләрҙә меланома үҫеше күпкә юғарыраҡ була. 20 йыл дауам иткән тикшеренеүҙәрҙә 14 штатта йәшәүсе 109 мең аҡ тәнле ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Анализдар күрһәтеүенсә, бигерәк тә аҡ йөҙлө, ерән сәсле, тәнендә миңдәре күп булған ҡатын-ҡыҙҙарға ҡояш зарарлы.

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл кеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

■ Кисен генә түгел, көн дауамында уҡ арыу тояһығыҙмы? Улайһа, түбәндәге кәңәштәр ярҙам итер. Көнөнә 8 сәғәт йоҡлау кәрәклеге тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр. Белгестәр әйтеүенсә, йоҡо туймаһа, арыуҙы нисек кенә еңергә тырышһаң да, бер файҙа ла булмаясаҡ. Иртәнге аштың дөрөҫ булыуы ла шарт. Бутҡа - иң дөрөҫ иртәнге аш. Уға емеш-еләк йәки һуттар, шулай уҡ йогурт һәм сыр өҫтәргә була. Һыу етешмәү - организм өсөн ҙур стресс. Баш мейеһе күҙәнәктәренә шыйыҡлыҡ етешмәһә, кеше тиҙ арый, уның аҡыл кеүәһе түбәнәйә, хәтер насарая. Эш урынында арыу тойғанда тәҙрә төбөндә үҫкән гөлдәрҙе тәрбиәләп алыу көсөргәнештән арындыра, ҡан баҫымы нормаллаша.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын ныҡытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асыҡыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫ

**Кеше үҙен ниндәй генә көслө аҡыл эйәһе итеп тоймаһын, ул тик матди донъяны ғына күрә һәм ҡабул итә ала. Элегерәк параллель донъя тураһында һөйләүселәрҙә параноя билдәләре күреп, психиатрик дауаханаға һалып та ҡуйырҙар ине. Шулай ҙа ғалимдар, кеше беҙҙе уратып алған донъяның бер процентын генә күрергә һәләтле, тигәнде таный хәҙер. Был ысынлап та шулайҙыр. Дини китаптарҙа ла беҙгә күренмәгән донъя, унда йәшәүселәр хаҡында мәғлүмәт бирелеп, уларҙан һаҡ булырға өйрәткән иҫкәрмәләр бар бит.**

# ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯ...

## уйҙырма түгел



Сәләмәт кешеләрҙең һис уйламағанда аҡылы зәғифләнеүе, йән, тән ауырыуҙары барлыҡҡа килеүенә кеше күҙенә күренмәгән донъя ағзалары ла сәбәпсе. Әсәйем минә эргәбеҙҙә параллель донъя барлығын иң беренселәрҙән булып аңлатты һәм уларҙан бер ҡасан да ҡурҡмаҫҡа ҡушты. Таңғы алтыла мәктәптең мейесенә ут яғырға йөрөгән әсәйем мине, 4-5 йәшлек баланы, үҙе менән ала ине. Мәктәп элекке мәсет бинаһында урынлашҡан. Күҙ алдына килтерегеҙ, әсәй мейестәргә утын һала, ут тоҡандыра, ошо саҡта кемдәрҙер парталарҙы түңкәрә йәки кире ултырта! Әсәйем эргәлә булғанғамы икән, шундай ығы-зығынан мин ҡурҡмайым, әммә әсәйҙең ҡурҡыуы, борсолоуы әле лә хәтеремдә. Тик нимә ҡылһын, йән аҫырар өсөн эшләргә кәрәк. Ул һәр саҡ таң менән уятып, мине үҙе менән эшкә йөрөттө, нисә барһаҡ та мәктәптә ниндәйҙер тауыштар булыр ине.

Үҫә төшкәс, әсәй менән бергә леспромхозға сайыр йыя башланыҡ. Ҡайһы саҡта ауылдан бик алыҫҡа китеп эшләр инек. Бер саҡ Ярыу тигән ерҙә сайыр йыйҙыҡ та, сайырсылар өйөндә ҡунып ҡалырға булдыҡ. Ашағандан һуң йоҡлап киткәнмен. Төн уртаһында әсәй бышылдап ҡына мине уята: "Тегеләр күсенә башланы!" Уның ҡурҡыуҙан ҙур булып киткән күҙҙәренә ҡарап: "Ҡурҡма, әсәй, ана ишеккә ҙур типке ҡуйылған. Үтер ҙә китерҙәр, беҙ юл эсендә уҡ түгел бит", - тинем шым ғына. Йорт эргәһенән генә үткән юлда балалар илашыуы, ат, мал ҡыуыусыларҙың һөрәнләүҙәре, ҡыңғырау зыңы, көлөшкән тауыштар 15 минут самаһы ишетелеп торҙо. "Альпинист" тигән радиоприемниғыбыҙ була торғайны, шунда ирҙәр һөйләшкән каналды табып, тауышын асып, йоҡлап киткәнмен. Иртән мотоциклды кистән ҡуйған урынында түгел, бөтөнләй икенсе яҡтан табып алдым. Бәхетиһең, элек-электән фермалар көҙөн ауылға күсенеп ҡайтыу менән уларҙың йәйләүенә ен-пәрейҙәр күсенер булған.

Ошоға оҡшаш тағы бер ваҡиға булды. Иҫке Собханғол менән Янһары ауылы араһында Саҡмағош шишмәһенең сыҡҡан урыны бар. Был ерҙе ололар, ен ояһы, тип йөрөтөрҙәр ине. Йәш саҡта өс тәгәрмәсле мотоциклға ҡатынымды ултыртып, шул тау битенә килдек. Ул ваҡытта өйләнешмәгәйнек әле. Сентябрь айы, ай яҡтыһында юл күренеп ята, ҡаршыбыҙҙа ялан аша ғына Саҡмағош буйы. Мин төнгө урманда баян уйнай башланым. Бер аҙҙан уйнауҙан туҡтағайным, ҡаршы яҡтағы һыу буйында тауыш ҡупты. Тауыштан, аттар ҡыңғырауы зыңынан быларҙың арбаға тейәлешеп, ашығып беҙгә ҡарай юлланғандарын аңлап ҡалдым. "Ана, уйнауҙан туктаны, ҡабаланығыҙ", - тине ирҙәр тауышы. Юлда саң ҡупты, ә үҙҙәре күренмәй, һауа тып-тын, ел юҡ. Айлы аяҙ тыныс төндә был хәл мине ныҡ гәжәпкә ҡалдырҙы. Әйберҙәрҙе мотоциклға ырғытып, ул урындан тайыу яғын ҡараныҡ. Шунда улар килеп етеп өлгөрһә, минән таң атҡансы баян уйнатырҙар ине, нисек ҡотолор инек уларҙан, белмәйем. Баян тауышы менән тыныс йөшәп ятҡан параллель донъяның тынылыҡтығын юғалттыҡ шулай.

Өсөнсө ваҡиға шулайыраҡ булды. Бер егет менән военкоматта комиссия үттек тә, төнгә ҡарай 40 километр алыҫлыҡта ятҡан ауылыбыҙға ҡайтырға сыҡтыҡ. Ай яҡтыһында Берлек ауылын үттек, ҡар йырып, Баҙал тауы аша менеп төшөүебеҙгә хәл бөттө, аяҡтар атламаҫ булды. Ике көн буйы ас йөрөгәнлектән, аслыҡ ашҡаҙанды бөрөп алып бара. Элек кеше юлаусыны йоҡлатырға бик индереп бармай торғайны. Шулай булмаһа, беҙ алыҫ юлға ынтылмаҫ та инек. Тауҙы аша төшкәс, Әлеш фермаһына етәһең, унда аласыҡтар тора. Тау эргәһендәге аласыҡҡа инеп, сыуалға ут яғып ебәрҙек. Иптәшем: "Ял итеп кенә сығабыҙ, һеҙ беҙгә теймәгеҙ, беҙҙең һеҙгә зыяныбыҙ теймәҫ", - тип әйтеп өлгөрөүе булды, өйҙө ян-яҡлап кемдер туҡмай башланы. Бәләкәй генә өй һелкенеп ултыра. Иптәшем бер аяғын сисеп өлгөргәйне, сылғауы менән итеген тотоп, ялан аяҡ сығып йүгерҙе, мин уның артынан. Арығансы йүгереп, таң алдынан ауылға килеп индек. Ошонан һуң кеше йәшәмәгән өйгә, ағас ҡыуышлыҡтарына, мәмерйәләргә инмәҫ булдым, сөнки тыныс, кеше, техника, хайуандар борсомаған урындарҙа беҙҙең күҙгә күренмәгән йән эйәләре йәшәй.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.
Бөрйән районы.
(Дауамы бар).

"БАШҠОРТ ҠАТЫН-ҠЫҘЫ" САЙТЫНАН

# БОЛАНУТТАН СӘЙ



**Боланутты сәй итеп ҡулланырға мөмкин булыуы, эсемлектең тәмлелеге тураһында тәүге тапҡыр Белорет районының "Урал" гәзите мөхәррире Рамаҙан ағай Мөхәмәҙиевтан ишеткәйнем. Шуғаса юл буйҙарында ап-ал сәскә-ҡойма булып үҫеп ултырған үҫемлектең бары матурлығы иғтибарҙы йәлеп итә ине.**

Баҡһаң, 12-се быуатта уҡ даны таралған, нәзәкәтле европалылар яратып эскән "копорье сәйе" ошо үҫемлектән етештерелгән икән. Сәйгә исем ауыл атамаһынан алынған. Тик 20-се быуат башына тиклем сит илдәргә сығарылған сеймал революцияның һуң етештерелмәй башлаған.

Боланут (русса Иван-чай) сәйе һаулыҡты ныҡыта, ҡанды яңырта, йөрәк-ҡан тамырҙарын ныҡыта, организмдан радиоактив матдәләрҙе сығара, көс бирә. Ул яраларҙың бөтәшеүенә булышлыҡ итә, эндокрин системаһы ауырыуҙарына ҡаршы тора, хатта яман шештәрҙең барлыҡҡа килеүен тотҡарлай. Ундағы С витамины, каротин, тимер, никель, баҡыр, марганец һәм башҡа матдәләр ҡанға ыңғай тәьҫир яһай ҙа инде.

Үҫемлекте иртә яҙҙа ашҡа ла һалалар, турамалар эшләйҙәр. Тамырын сейләй ашайҙар, киптереп, онтағын онға ҡушалар. Шул ондан кофе эсемлеге лә әҙерләргә мөмкин.

**Боланут сәйен нисек әҙерләргә?**

Был маҡсатта июнь уртаһынан август уртаһына тиклем өсҡө 4-5 япрағын ғына йыялар ҙа, 5 см тирәһе ҡалынлыҡта йәйеп һалып, киптерә бирер алалар, уны даими әйләндергеләп торалар. Япраҡтар йомшарғас, уска һалып, һуты сығырлыҡ итеп, сигара һымаҡ итеп төрәләр. Япраҡты иҙгесләү, ҡыҫҡылау кәрәкмәй. Төрнәктәрҙе ҡалайға һалып, өҫтөнән үҫемлеккә теймәҫлек итеп ҡалын еүеш сепрәк менән ябалар. Япраҡ кәрән төҫкә инә башлай, әммә уның күгәреүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Көрән төҫкә ингәс, төрнәктәрҙе ваҡлап, ҡыҙыу булмаған (100 градус тирәһе) духовкаға йә мейескә ҡуйып, әйләндергеләп тороп киптерәләр. Кипкәнен ала баралар һәм эре иләк аша үткәрәләр. Ул бер нисә көндән көс йыйып бөтә һәм хуш еҫле, файҙалы эсемлек әҙерләү өсөн яраҡлы була. Ике йыл һаҡларға була. Ул ҡара сәйгә оҡшаған, әммә составында кофеин булмауы менән отошло.

Әйткәндәй, Баймаҡ яҡтарында уны "Хәҙрәт сәйе" тип тә йөрөтәләр икән. Мөжәүир хәҙрәт шул сәйҙе эсергә, артыш, мәтрүшкә, боланут менән бөйҙө лә төтәҫләргә ҡушҡан - өйҙө таҙарта, һау-сәләмәт итә, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡшырта, тигән.

*ҺАБАҠТАР*

# ҮКЕНЕС ЙӘШТӘРЕ

**Ялбыр ҡашы күҙ ҡабағын ҡаплап, һәленеп төшкәнен күргәс тә, иренең кәйефе шәптән түгеллеген аңланы Мәскүҙә. Шуға ла өнһөҙ генә ҡашығаяҡ янындағы эшен дауам итте. Белә ул: бөгөн йәмәгәте бер ҡайҙа ла бармаясаҡ һәм бөтә асыуын ҡатынына төшөрәсәк йә күңел төшөнкөлөгөнә биреләсәк. Элегерәк йәмәгәтенең был халәте бер көндә үтә ине, ҡартая килә, аҙна-ун көнгә һуҙыла.**



Йыл һайын ауыл хужалығы эштәре тамамланып, уңыш дәүләт келәтенә инеп ятҡас, мәктәптә ауыл хеҙмәтсәндәрен, хеҙмәт ветерандарын саҡырып, класс сәғәттәре, кластан тыш саралар ойошторола. Йәш быуын менән осрашыуҙан, тырыш хеҙмәт хәтирәләренән, күңелле иҫтәлектәрҙән күңелдәре күтәрелеп ҡайтҡан ауылдаштарын күреп, уларҙың араһында үҙенең дә булмауына оторо йәне көйә Ғәлиҙең.

Исеме Ғәли түгел, әлбиттә. Аҙан әйтеп ҡушҡан исеме Миңлеғәли уның. Тыуғанда уң яҡ ҡолағы ярпыһында ҙур ҡара миң булғанға шулай тип ҡушҡандар. Олатаһы-өләсәһе иҫән саҡта ғына тулы исеме менән йөрөп ҡалды ул. Аҙаҡ уны Ғәли тип кенә йөрөттөләр. Ситтән тороп, агрономлыҡҡа уҡып сыҡҡас, Ғәли Вәлиевич булып китте. Ысындырмы-юҡтырмы, юғары уҡыу йорто дипломын алып ҡайтҡас, хеҙмәттәштәре уны ҡотлап ҡулын һуҙғанда, үҙен уйынлы-ысынлы "Ғәли Вәлиевич" тип таныҡкан, тиҙәр.

Хәҙер иһә уны Ғәли тип кенә йөрөтәләр. Ҡасандыр йәшел күҙҙәренән осҡон сәсеп, ҡуйы ҡара ҡаштарын нисек теләй, шулай сөйөп ҡараған ҡуйы бөҙрә сәсле ирҙең исеме менән бергә абруйы ла ҡыҫҡарҙы шул.

Ғөмүмән, Миңлеғәли Абдулвәли улының исеме нисә тапҡыр үҙгәрһә - шунса тапҡыр тормош кисерҙе ул. Бала сағы, йәшлек йылдары хәсрәтһеҙ үтте. Олатаһы-өләсәһе ҡурсыуы, атай-әсәһенең абруйы менән үҫкән егеткә үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫыуы ауыр булманы. Хәрби хеҙмәттән һуң совхозда эшләне, ситтән тороп, юғары белем алды.

Икенсе тормошо Ғәли Вәлиевич тип йөрөтә башлағас булды. Тормошоноң бына ошо дәүерен һағынып иҫкә ала ул. Бар ине бит уның да ер һелкетеп йөрөгән ваҡыттары! Хеҙмәт вазифаларының төрлө баҫҡысында, әлбиттә, үҙен төрлөсә күрһәтте. Дәрәжәһе, абруйы буйынса үҙенән юғарыраҡтарҙың һүҙен, аңлаһа-аңламаһа ла, тоғро эт кеүек, күҙҙәренә тура ҡарап, башын һелкмәйенсә, эйәген ҡаҡмайынса тыңламаны. Үҙҙәренең алдында теҙләнергә ҡушһалар, моғайын, етәкселәрҙең был үтенесен дә үтәр ине ул, гонаһ шомлоғо. Һәр сөскөргәнгә "йәрхәмбикалла" тип әйткән кеше кемгә оҡшамаһын, бына шулай түбәнселеккә төшөп, юғары үрмәләне Ғәли. Бейек осоу өсөн көслө ҡанаттан бигерәк, кәкре томшоҡ кәрәк икәнлеген яҡшы белә ине ул, нәҫелендә булмаһа ла, еҫтең ҡайҙан килеүен, елдең ҡайҙан иҫеүен белеү һәләте көслө ине уның. Шулай итеп, тотоп һелкһәң, ҡойолорлоҡ бер нәмәһе булмаған әҙәм колхоз дилбегәһен ҡулына алды. Ҡул аҫтындағылар менән үҙен ҡол биләүсе һымаҡ тотто. Үҙенән олораҡтарға ла хатта сыбыртҡы менән киҙәнергә оялмаған, тиҙәр уның хаҡта. Етәксе булған осорҙа нисек теләне - шулай йәшәне, ә нәфсеһе бик ҙур булды уның. Көн дә күңел асыу, кәйеф-сафа, ҡатын-ҡыҙ. Ауылдаштары уның тәртибенән, эшенән ризаһыҙлыҡ белдереп, тейешле урындарға мөрәжәғәт итеп тә ҡаранылар, әммә үҙәктән килгән һәр түрә-ҡараның машинаһын-арбаһын майлап ебәргәс, үҙенең эштәре лә яйлы-майлы булды. Ялыу-тәнҡиттәр нисек яҙылһа, шул урында ҡалды.

Тормошо мәңге ошолай гөрләп торор һымаҡ тойолһа ла, үҙгәртеп ҡороу елдәре уның хужалығына ла килеп етте. Бер ҡасан да һайыҡмаҫ, бөтмәҫ булып күренгән дөйөм хужалыҡ байлығы бер көндө юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Колхоз тарҡалып, иген баҫыуҙары, һарай-ҡуралар бушап ҡалғас башланды ла инде Ғәли тормошо. Үҙаллыраҡтар, мутыраҡтар, алдынғыраҡ ҡарашлылар хужалыҡтың нимәһен ҡулына эләктерә алды - шуны эләктереп, йә үҙ эшен асты, йә ҡалаға тайҙы. Ә Ғәли юғары дәрәжәле кешеләргә һыу ҡойоп, ҡул йыуҙырыуҙан, төрлө мәжлес-байрамдарҙа уларҙың бөйөклөгөн данлап, шәхесен маҡтап, шиғри юлдар сыймаҡлауҙан башҡа һәләте булмаған кеше булараҡ, бөтөнләй юғалып ҡалды. Дөрөҫөрәге, ҙур ауылдың уртаһында яңы ғына һалынған ике ҡатлы мөһабәт йортон, баҡса-ҡураһын ташлап киткеһе килмәне.

Тәүге йылдарҙа Ғәли ауылдаштарының үс алыуынан ҡурҡып йәшәне. Эшсән, изге күңелле яҡташтары күңелендә ундай уй булмағанын аңлағас, ҡултыҡ аҫтына таушала биргән ҡара папкаһын тығып, урамға сыҡты, ауылда үткәрелгән сараларҙа, йыйылыш-байрамдарҙа һүҙ алып, телмәр тоторға ғәҙәтләнеп алды. Һәр сығышында "бына мин рәйес булған осорҙа" тигәнерәк фекер яңғырауынан биҙгән ауылдаштары яйлап уға һүҙ бирмәй, осрашыуҙарға саҡырмай башланы. Был иһә социалистик ярыштарҙа, биш йыллыҡтарҙа еңеп сыҡҡан колхоз рәйесен оторо ярһытты. Әммә халыҡ яҙғы даръя менән бер, уға ҡаршы барып булмай.

Тора-бара үҙенә тағы бер шөғөл тапты. Әлеге ҡара папканы ҡултыҡ аҫтына тығып, көн оҙоно урам ҡыҙырыу, берәүҙән ишеткән хәбәрҙе икенсегә еткереү, бер кешелә күргәнде икенсегә һөйләү, арттырыу, төймәләйҙе дөйәгә әйләндереү, булмағанды булды тиеү, алдауйолдау. Көнөнә бер тапҡыр медпунктҡа, китапханаға, элекке идаралыҡ бинаһына барып килмәһә, берәй яңылыҡ ишетмәһә йәки берәйһен яманлап һөйләмәһә, күңелен бушлыҡ, яңғыҙлыҡ тойғоһо биләп ала. Бер ауылдашының уңышын ишетеп ҡалһа, мотлаҡ уның ҡасандыр үҙенә килеп, инәлеп, нимәлер һорауын иҫкә ала. Берәй ғаиләлә туй йәки берәй күңелле байрам булһа, ҡасандыр ул йорт хужабикәһенең һөйәркәһе булыуын тәфсирләй. Тыңлаусы, ҡыҙыҡһыныусы булһа иһә, ҡыуанысының сиге булмай.

Шулай ҙа кемдең кем икәнлеген белгәндәр ҙә күп шул ауылда. Ана шуларҙың хөкөмөнән ҡурҡа Ғәли. Әлегә тиклем уның кемлеген күҙенә ҡарап әйткәндәре юҡ. Шулай ҙа кинәйәле, төрттөрөп һүҙ һөйләүҙәрен ишеткәне бар. Яңыраҡ колхоз рәйесе булып эшләгәнендә водитель булып эшләгән Хәбир: "Һуңғы ваҡытта һине гел әбей-һәбейҙәр янында күрәм, хәҙер ғәйбәт һөйләүҙән башҡаға эшкинмәйһеңме ни?" - тип мыҫҡыл итте. Быныһы инде уның - иң ауыртҡан урыны. Ысынлап та, алтмышын яңы артмаҡлаһа ла, кәре бөттө уның. Колхозсылар көсө менән төҙөлгән йорто ла, баҡса-ҡураһы ла теше төшкән әбей йәки бабайҙың ауыҙына оҡшап бара. Тегенән ҡойола, бынан ишелә. Төҙәтеп, ҡағып ҡуйырға көсө лә, ә иң ҡурҡынысы - теләге лә юҡ.

...Мәктәп уларҙың өй эргәһендә генә. Ғәли тәҙрәнән күҙен алмай, унан сыҡҡандарҙы күҙәтә. Быңа бөтәһе лә гөлләмәләр менән күтәренке кәйефтә сыҡты. Ни тиклем күренмәҫкә тырышһа ла, секерәйеп ҡарап торған Ғәлигә бөтәһе лә, әлбиттә, иғтибар итте. Ул ғына түгел: күптәр хатта ирҙең күҙендә йәш тамсыһы йылтырауын күрҙе. Быға шаһит булыусылар, һис шикһеҙ, уның үкенес йәштәре булыуын аңланы. Түрбашта үҙ эше менән булған Мәскүҙә лә хатта стена аша иренең күңел кисерешен тойҙо һәм ысын күңелдән йәлләне...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Тыңлай белеү: кешеләрҙең йөрәктәренә инер өсөн ҡолаҡтарығыҙҙы файҙаланығыҙ

*Лидерҙың ҡолағында кешеләрҙең тауышы яңғырарға тейеш.*
***Вудро Вильсон, Америка президенты.***

*Яҡшы лидер үҙе ишетергә теләгән нәмәне түгел, ә үҙе белергә тейешле нәмәне әйтеүселәрҙе хуплай.*
***Джон Максвелл.***

Кешеләрҙән нимәлер эшләүен талап итер алдынан лидер уларҙың йөрәген яуларға тейеш. Бәйләнеш ҡануны шундай. Әммә бының өсөн уға кеше күңелендә нимә ятҡанын белергә кәрәк. Һәм быға бары тик уларҙы иғтибар менән тыңлап ҡына өлгәшергә мөмкин.

Насар лидерҙар араһында тыңлай белмәү һәм тыңларға теләмәү киң таралған. Америка менеджменты атаһы Питер Друкер менеджмент һәм дөйөм идара итеү проблемаларының 60 проценты - аралаша белмәү хатаһы, тип белдерә. Был фекерҙе артабан үҫтереп, аралашыуға бәйле күпселек проблема тыңлай белмәүҙән килә, тиер инем.

Бик күп тауыш беҙҙең иғтибарыбыҙҙы йәлеп итергә тырыша. Уларҙы тыңлауға бүленгән ваҡытығыҙҙы нисек файҙаланыу тураһында уйлағанда, шуны ла онотмағыҙ - кешеләрҙе тыңлағанда һеҙ ике маҡсатты күҙаллайһығыҙ: улар менән бәйләнеш булдырырға һәм һабаҡ алырға. Ошо сәбәптәр арҡаһында алдығыҙҙа түбәндә атап кителәсәк категория кешеләре торғанда күҙҙәрегеҙҙе генә түгел, ҡолаҡтарығыҙҙы ла асырға тейешһегеҙ:

**Артығыҙҙан эйәреүселәр.** Арттарынан кешеләр эйәртергә әҙер булған лидерҙар үҙҙәренең артынан эйәреүселәр менән аралашҡанда ниндәйҙер эш башҡарыуға ҡарағанда күберәкте эшләй. Улар әңгәмәселәренең һәр ҡайһыһына кешелеклелек күрһәтеү өсөн ваҡыттарын йәлләмәй. Граф Филип Стенхоп Честерфилд "күптәр үҙенең һорауын ҡәнәғәтләндереүгә ҡарағанда үҙ тарихын тыңлауҙарын хуп күрә" икәнлегенә инанған. Әгәр һеҙҙең кешене түгел, ә бары тик факттарҙы ғына тыңлау ғәҙәтегеҙ бар икән, фокусығыҙҙы үҙгәртеп, алдығыҙҙа тороусыны ысынлап тыңлай башлағыҙ.

**Клиенттарығыҙ.** Чероки ҡәбиләһе индеецтарында шундай мәҡәл бар: "Шыбырлауҙы тыңлаһаң, һыҡтауҙы ишетергә тура килмәҫ".

Үҙҙәренең идеяһына башкөлләй сумып һәм мауығып, клиенттарҙың борсолоуын, уларҙың зарын һәм тәҡдимен ишетмәгән лидерҙар аптырата. Билл Гейтс был хаҡта шулай тигән: "Ҡәнәғәт булмаған клиенттар - һәр ваҡыт проблема. Улар уҡ һеҙҙең иң ҙур мөмкинлегегеҙ булып та тора". Яҡшы лидерҙар һәр ваҡыт үҙҙәре хеҙмәтләндергән кешеләр менән тығыҙ бәйләнештә ҡала.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 7 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.15 "Время обедать!"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (12+).
16.10 "Они и мы" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Департамент". Криминальный сериал. 9-10 серии (12+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Восстание планеты обезьян". Фантастический боевик (16+).
01.35, 03.05 "Адам". Драма (16+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Три капитана. Русская Арктика". Фильм 1-й.
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Вчера закончилась война". Военная драма. Часть 1-я (16+).
00.40 "БАМ": в ожидании оттепели". Док. фильм.
01.50 "Противостояние". Сериал (16+).
04.05 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
